ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 октябрь (карасай) 2024

№41 (1134)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәнлектәрҙең үҙ китабы...**



6

**Әҙәм балаһы...**

**нисек бар булған, нисек йәшәй һәм үҫешә?**



8-10

**Арҡалы**



11

**Яҙмышыбыҙға шөкөр итәйек!**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 953 һум 58 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ*

# ОЛО СПОРТ - БАШҠОРТОСТАНДА




**Өфөбөҙ 17 октябрҙән 19-ына тиклем Рәсәйҙең спорт баш ҡалаһына әүерелә, йәғни беҙҙә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумы үтә.**

Был оло форум сиктәрендә Башҡортостандың баш ҡалаһына илдең һәм донъяның бөтә мөйөштәренән 150-нән ашыу олимпия чемпиондары һәм тренерҙары ҡатнашлығында бер нисә сара үтә. Уларҙа төрлө илдәрҙән биш мендән ашыу спорт һәм эшлекле берләшмә вәкилдәре ҡатнашасаҡ, улар араһында Фәләстан, Камерун, Намибия, Сербия, Бахрейн, Ираҡ, Ҡаҙағстан һәм башҡа илдәр вәкилдәре бар. Форум өс көн дауам итә һәм 19 октябрҙә "Йәйәү йөрөү көнө" менән тамамлана, унда республиканан 25 мең самаһы кеше һәм баш ҡала ҡунаҡтары ҡатнашыуы көтөлә.

Форумдың девизы - "Спорт. Ғаилә. Рәсәй" - ҡыҫҡа ғына, шул уҡ ваҡытта илебеҙ граждандарының спортты, ғаилә ҡиммәттәрен баһалауын, илебеҙ өсөн ғорурланыу тойғоларын да сағылдыра. "Традиция буйынса, форум һәр ваҡыт илебеҙҙең төрлө ҡалаларында үтә. Был юлы оло спортты ошо көндәрҙә үҙенең 450 йыллығын байрам иткән Башҡортостан баш ҡалаһы - Өфө ҡабул итте. Форум ҡунаҡтары Рәсәйҙең тағы бер үҙенсәлекле, бик ҡыҙыҡлы һәм күп төрлө төбәгенең мәҙәниәте, тарихы һәм мираҫы менән танышасаҡ", - тип белдергәйне Рәсәй Президенты Владимир Путин былтыр ошо форумдың Өфөлә үтәсәге тураһында иғлан иткәндә.

"Рәсәй - спорт державаһы" - беҙҙең республика ҡабул иткән иң оло ваҡиға. Форум традиция буйынса Рәсәй Президенты ҡатнашлығында үтә. Беҙ форум сиктәрендә Өфөбөҙҙә Фехтование үҙәге һәм Ишеү слаломы комплексын асасаҡбыҙ. Бынан тыш, Бокс төнө, керлинг, фехтование, көрәш буйынса ярыштар ингән киң спорт программаһы әҙерләнек", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

Шулай итеп, Өфөнөң 8 майҙанында 40-лап сара үтәсәк. Спорт ярыштары, мәҙәни программалар, эшлекле сессиялар, Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Физик культура һәм спортты үҫтереү буйынса совет ултырышы, күргәҙмәләр - улар иҫәбендә.

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ГУБЕРНАТОРҘАР КЕМ?



**Википедия мәғлүмәттәренә ҡарағанда, республикала 80-гә яҡын яҙма баҫма матбуғат донъя күрә һәм таратыла. Башҡортостан халҡы өсөн ҡағыҙға баҫылған гәзит һәм журналдарҙы алдырып уҡыу мөһим булып ҡалыуын күреү шатлыҡлы. Баҫма матбуғат тарихтың һәм мәҙәниәттең бер өлөшө булараҡ, быуындар араһында бәйләнеш тыуҙыра. Шулай уҡ гәзит-журналдар беҙгә үткәндәрҙе яҡшыраҡ аңларға мөмкинлек бирә, әлеге дәүер хаҡында мәғлүмәтте туплай.**

"Ташҡа баҫылған - мәңгелек", тиеүҙәре дөп-дөрөҫ. Һәр кем үҙенең күңеленә ятҡан гәзит һәм журналдарҙы яҙҙырып уҡый, һатып ала. Беҙҙең өйгә лә байтаҡ яҙма баҫма килә, почтальонды көтөп алабыҙ, һәр береһен йотлоғоп уҡыйбыҙ. Йортобоҙға бер гәзит тә килмәүен хатта күҙ алдына ла килтерә алмайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БАШ ҠАЛАМ*

# ЗАМАН МЕНӘН БЕРГӘ

**Өфөлә алып барылған төҙөлөш эштәренең киң ҡоласлығы иҫ киткес. Баш ҡаланың ниндәй районын алып ҡараһаң да, бейек йорттар ҡалҡа, яңы магазиндар үҙ ишектәрен аса, ихаталар төҙөкләндерелә, юлдар яңыртыла һәм башҡалар.**

Яңы райондарҙы үҙләштереп, күп ҡатлы йорттарҙы төҙөүсе йорт һалыусыларҙан (застройщик) мотлаҡ машина ҡуйыу урындарын, балалар һәм спорт майҙансыҡтарын эшләүҙәрен талап итергә кәрәк, минеңсә. Был йәһәттән, әйтергә кәрәк, ҡайһы бер яңы райондарҙы маҡтап телгә алырға була: улар майҙансыҡтарҙа ғына туҡталып ҡалмай, ә балалар баҡсаһы, мәктәп һәм башҡа социаль объекттар ҙа төҙөй. Әүҙем спорт яратыусылар тураһында ла онотмай улар: велосипед һәм самокатта йөрөү өсөн махсус юлдар, уларҙы фатирға ташып йөрөүҙән азат иткән туҡталҡалар ҙа эшләй. Дәүләт тарафынан "Ғаилә ипотекаһы" программаһының оҙайтылыуы күпселек йәш ғаиләләргә нәҡ ошондай яңы райондарҙан фатир һатып алырға мөмкинлек бирә. Йәш ғаилә - тимәк, йәш бала. Шуға күрә подъездарҙа коляскалар ҡуйыу өсөн махсус урындарҙың булыуы, ихатала хәүефһеҙ уйын майҙансыҡтарының эшләнеүе төп шарттарҙың береһе.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✔ Баҫма гәзит-журналдарҙы тотоп уҡыу үҙемде матбуғат донъяһына ҡағылышлы итеп тойорға ярҙам итә. Гәзит менән уҡыусы араһында бәйләнеш булмайынса, баҫманы ҡабул итеүе ауыр.



БАШ ҠАЛАМ



# ЗАМАН МЕНӘН БЕРГӘ

(Башы 1-се биттә).

Бындай яңы райондар, башлыса, ҡаланың ситендә барлыҡҡа килә. Тимәк, унда йәшәүселәр өсөн, гәҙәттә, ҡала эсендә булған эш урынына барып етеү мәсьәләһенең хәл ителеше лә мөһим роль уйнай. Автобустар расписание буйынса йөрөп торған, ҡышын - һыуыҡтан, йәйен эҫенән һаҡланырлыҡ туҡталҡалар булған урында йәшәү үҙе бер киңәнес. Һәм фатир һатып алыусылар нәҡ ошондай урындарҙы эҙләй ҙә инде.

Элекке "Искра" кинотеатры алдындағы "Ҡурай менән малай" фонтаны тураһында һәр кем белә. Уның рәсми исеме - "Яҙғы йыр". Барыһының да яратҡан фонтаны баш ҡалала 1974 йылда асылды. Ниһайәт, быйыл уның эргә-тирәһе төҙөкләндерелеп, матурайып ҡалды. Хәҙер был тирәлә рәхәтләнеп ял итергә мөмкин, бының өсөн бөтә шарттар тыуҙырылған: юлдар яҡшы, яңы эскәмйәләр һәм сүп-сар һауыттары ҡуйылған, сәскәләр һәм йүкә ағастары ултыртылған. Ә иң мөһиме - фонтан яңыртылды. Төҙөкләндереү барышында 24 метрлыҡ ике кимәлле фонтан һауыты урынлаштырып, уны автоматик һыу бүлеү станцияһы һәм һыуҙы зарарһыҙландырыу системаһы менән йыһазландырҙылар. Ғөмүмән, барыһын да яҙып тормайым, яңыртылған фонтанды һәм уның эргәһендәге матурлыҡты һәр кем үҙ күҙе менән күрергә тейеш. Фонтанға яҡын урынлашҡан йорттарҙа йәшәүселәрҙең "Уңайлы ял итеү урыны барлыҡҡа килде", тип шатланыуҙары юҡҡа түгелдер, моғайын.

Киләсәгебеҙ бөгөн үҫеп килгән балалар ҡулында. Уларҙың бөгөнгөһөн матур итеү, балалар баҡсаһында, мәктәптәрҙә уңайлы мөхит булдырыу - беҙҙең бурыс. Минең балалар уҡыған 119-сы ҡала мәктәбендә лә быйыл төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Мәктәптең фасады, һыу һәм ут менән тәьмин итеү системаһы, кластарҙағы иҙән-түбәләр, стоматология һәм медицина кабинеттары яңыртылды һәм башҡалар. Өр-яңынан йыһазландырылған һәм ҡорамалдар ҡуйылған таҙа, яҡты кластарҙа уҡыу үҙе бер бәхет. "Сағыу төҫтәр, яңы мебель, кластарҙа интерактив панелдәр - быларҙың барыһы ла уҡыуҙа ярҙам итә", ти 8-се синыфта уҡыған улым.

Хеҙмәттәшем Карпово ауылында йәшәй һәм бығаса тиклем улар Кузнецов затоны тирәһендә йәки Колгуевский урамында тығында торалар ине. 1 октябрь Пугачев урамы киҫелешендәге транспорт сиселешенең һәм Генерал Рыленко урамы буйлап юлды асыуҙары был хәлде күпкә яҡшыртты. Ул юл асылыуына ҡыуанһа, беҙ уның һуңламайынса эшкә йөрөй башлауына ҡыуанабыҙ.

Баш ҡалала төүлек әйләнәһенә тормош гөрләй. Миллионлы ҡаланың тотош республикабыҙ йәшәйешенә йоғонто яһауын инҡар итеп булмай. Шуға күрә уның үҫеше, нығыныуы һәр кем өсөн мөһим. Яңырыуҙар булһын, халыҡ өсөн уңайлыҡтар артһын, заман менән бергә атлаған ҡала булып ҡалһын яратҡан Өфөбөҙ.

**Рәмилә ИСТАМҒӘЛИНА,**
**табип.**

КӨНҮҘӘК



# ЯРЛЫ НИҢӘ ҺИМЕРӘ?

**Ошо көндәрҙә БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы "Сәләмәт республика" акцияһы сиктәрендә үткәрелгән халыҡ һаулығын тикшереү һөҙөмтәләре менән таныштырҙы. Шуныһы яҡшы: ошо йылдың апреленән алып сентябргә тиклем әлеге акция сиктәрендә сәләмәтлек поездарында эшләүсе сәләмәтлек үҙәктәре һәм махсуслашҡан табип-белгестәр бригадалары хатта бәләкәй генә ауылдарҙы ла ситтә ҡалдырманы, тип хәбәр ителде Министрлыҡ отчетында.**

Мәсәләән, былтыр бындай һаулыҡ үҙәктәре 312 тораҡ пунктында йәшәүсе 34607 кешене тикшергән булһа, быйыл улар 332 ауылда булып, 36833 пациентты ҡараған. Сәләмәтлек бригадалары Башҡортостандың бөтөн райондарын тиерлек айҡап сыҡты һәм төрлө сәбәптәр менән район үҙәгенә йәки ҡала дауалау учреждениеларына барып һаулығын тикшертеү мөмкинлеге булмаған мөнәрләгән кешене ҡараған. Бер яҡшының бер яманы, тигәндәй, үкенескә, һөҙөмтәләр әллә ни ҡыуанырлыҡ түгел икән: республикала артыҡ ауырлыҡ (6908 кеше), юғары ҡан баҫымы (7153 кеше) менән яфаланыусылар һәм ҡанында холестерин кимәле юғары булған пациенттар һаны былтырғыға ҡарағанда артҡан, тип хәбәр итә министрлыҡ. Бынан тыш, ҡанында шәкәр кимәле күп булған һәм шәкәр диабетына, шулай уҡ яман шеш ихтималлығына, туберкулез сиренә шик булғандар асыҡланған.

Проценттарҙа был күрһәткестәр күпмене тәшкил итәләр, мәгәр бынан алдағы йылдарҙа, мәсәлән, республика халҡының 19 йәштән өлкән 61,4 проценты ғына ла һимеҙлектән яфа сигә, тип әйтелә статистика материалдарында. Роспотребнадзор белгестәре бынан ике йыл элек кенә әле бындай сирлеләрҙең балалар һәм үҫмерҙәр араһында ла байтаҡ булыуы айҡанлы борсолоу белдерә ине. Ғөмүмән, бындай күренеш, йәғни балаларҙан алып өлкәндәргә тиклем һимеҙлектән ыҙаланыусыларҙың арта барыуы беҙҙә генә түгел, бөтөн Рәсәй буйынса ла күҙәтелә, ти медиктар. Статистика буйынса 62,5 процент рәсәйле ана шундайҙарҙан икән.

Һәм һимеҙҙәр араһында ирҙәрҙең күберәк булыуы билдәләнә. Айырыуса уларҙың "һыра ҡорһаҡлы"лары (ғәфү итә күрһендәр) бик күп күҙгә ташлана, бындай "йөклө" ирҙәрҙең күбәйеүе бик иләмһеҙ

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# ГУБЕРНАТОРҘАР КЕМ?

(Башы 1-се биттә).

Үҙем йәшәгән төбәктәге хәл-әхүәлдәрҙе белеү өсөн "районҡаны" ҡарап сығам да, баш баҫып, яратҡан гәзитем "Киске Өфө"нө уҡырға ултырам. Иҫ киткес ҙур мәғлүмәтле баҫма ул. Әлеге мәлдә гәзиттәге "Тарихнамә" рубрикаһында баҫылып килгән "Ырымбур губернаторҙары һәм башҡорттар" тураһындағы мәғлүмәттең ни тиклем баһалы, файҙалы икәнлеген һәр кем аңлай торғандыр. Үҙ заманында бай тарихи мәғлүмәт яҙып ҡалдырғандарға, башҡорт теленә тәржемә эшләгәндәргә һәм уны гәзит биттәрендә баҫтырғандарға ҙур рәхмәт.

Башҡорт - тәбиғәт балаһы һәм уның өсөн тәбиғәт менән бәйле һәр бер нәмә ҡыҙыҡлы. Шуға күрә "Киске Өфө"лә ҡоштар тураһында баҫылған мәғлүмәттәр менән ҡыҙыҡһынып танышып барам. Көньяҡ Урал тәбиғәтенең ҡоштар донъяһы ни тиклем бай икәнлеген белдем хәҙер. Балалар менән ҡыҙыҡһынып бергә уҡыйбыҙ, башҡортса һәм урыҫ телендә исемдәрен ятлайбыҙ.

Минең өсөн гәзиттә баҫылған мәҡәлә, мәғлүмәттәрҙең бүлектәргә бүленешенең уңайлы булыуы мөһим. Иғтибарҙы ситкә алып китмәҫлек итеп баҫылған мәҡәләне уҡыуы һәм хәтерҙә ҡалдырыуы еңел, уңайлы. "Киске Өфө" был йәһәттән һынатмай. Шулай уҡ баҫманың төҫ яғынан биҙәлеше лә күңелгә ятышлы. Мосолман булараҡ, гәзиттең тәүге һәм һуңғы биттәренең йәшел төҫтә булыуы оҡшай. Ә башҡа биттәренең, ҡайһы бер гәзиттәр кеүек, ыбырсыбыр итеп төрлө төҫтә түгел, ә аҡлы-ҡаралы баҫылыуы күҙгә ныҡ көсөргәнеш төшөүенән һаҡлай.

Баҫма гәзит-журналдарҙы тотоп уҡыу үҙемде матбуғат донъяһына ҡағылышлы итеп тойорға ярҙам итә. Гәзит менән уҡыусы араһында бәйләнеш булмайынса, баҫманы ҡабул итеүе ауыр. Ә "Киске Өфө" ошо бәйләнеште юғары кимәлгә күтәреп кенә ҡалмай, ә уны көндән-көн нығыта. Гәзит үҙ уҡыусыларының баҫманан нимә көткәнен аңлай һәм ошоно ҡыҙыҡлы, тулы итеп бирә белеүе менән алдыра. "Киске Өфө" уны ҡулына алған һәр кемгә ҙур мәғлүмәти йоғонто яһай, уның зиһенен үҫтерә, донъяға ҡарашын ыңғай яҡҡа үҙгәртә, фекерләү, уйланыу өсөн азыҡ бирә. Гәзит-журналдарҙың донъя күреүе нәҡ ошо талаптарға бойһонорға тейеш түгелме ни? Минеңсә, нәҡ шулай.

**Зариф МӘҠСҮТОВ,**
**тимер юл мастеры.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔1 ноябрҙән Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу тураһында белешмәне Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша алырға мөмкин. Рәсәй Премьер-министры Михаил Мишустин тейешле ҡарарға ҡул ҡуйған. Элек бындай белешмәләрҙең беҙҙәм өлгөһө булманы, уны хәрби часть командирҙары йәки хәрби комиссариаттар ғына бирергә хоҡуҡлы ине, был иһә яугирҙарға һәм уларҙың туғандарына ҡатмарлыҡтар тыуҙырҙы. Әлеге башланғыс белешмәләрҙең берҙәм өлгөһөн билдәләүгә йүнәлтелгән. "Улар ярҙамында яугирҙар төбәк властары билдәләгән төрлө социаль ярҙам сараларын ала", - тип белдерҙеләр ил Хөкүмәтендә.

✔Башҡортостандан дөйөм ауырлығы 10 тоннаға яҡын тәшкил иткән бишенсе ылау Курскиға барып етте, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин. Ул "Берҙәм Рәсәй"ҙең урындағы бүлексәләре майҙансыҡтарында Миңлегәле Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабының әүҙем эшләүен билдәләне. "Йәшлек Хаус" йәштәр йортонда ла гуманитар ярҙам (миҙгелгә ярашлы кейем-һалым, аяҡ кейеме, дарыуҙар, шәхси гигиена әйберҙәре, түшәк кәрәк-яраҡтары) йыйыу ойошторолғайны.

✔Башҡортостанда туриндустрияның иң яҡшы белгестәре өсөн "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған туризм өлкәһе хеҙмәткәре" тигән яңы маҡтаулы исем булдырыла. Законға тейешле төҙәтмәләрҙе Ҡоролтай депутаттары октябрҙәге пленар ултырышта ҡарай. "Әлеге көндә республикала туризм байтаҡ йүнәлештәр буйынса ныҡлы үҫеш этабында тора. Туристик тармаҡ хеҙмәткәрҙәре Башҡортостандың ҡунаҡсыл төбәк имиджын булдыра", - тип иҫәпләй республика парламенты спикеры Константин Толкачев.

✔Бөрйән районы хакимиәте башлығы Ғәзиз Манапов үҙ вазифаһын ҡалдырҙы. Был турала ул "Бәйләнештә"ге рәсми сәхифәһендә хәбәр итте һәм район халҡына ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерҙе. Әлеге ваҡытта район хакимиәте башлығы вазифаһын Ғайса Хәлитов башҡара.

✔Ришат Мансуров йәнә Шишмә районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Ҡарар муниципаль район Советының сираттағы ултырышында ҡабул ителде, унда вазифа биләүгә конкурсҡа йомғаҡ яһалды. Депутаттар бер тауыштан Мансуров кандидатураһы өсөн тауыш бирҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 19 сентябрҙә чиновниктың контракт ваҡыты тамамланыуға бәйле отставкаға китеүе тураһында билдәле булды. Мансуров хакимиәте башлығы вазифаһына 2020 йылда тәғәйенләнгәйне.

✓ *Хәйер, кеше рус телендә уйлаймы, әллә бүтән телдәме - уныһы мөһим түгел. Иң мөһиме - уйҙарының ниндәй булыуы. Яҡшылыҡмы уның уйында, әллә яуызлыҡмы?*



күренеш кенә түгел, ә хәүефле симптом да; уларҙың, әгәр ваҡытында үҙ һаулыҡтарын ҡайғыртмаһалар, киләсәктә төрлө сиргә дусар булыуҙары шикһеҙ. Бында һыраны ғына ла ғәйепләп булмай, ә бәлки, улар араһында был эсемлекте ҡулланмаусылар ҙа барҙыр, сөнки, ни тиһәң дә, хәҙер күпселек ирегет машиналы булып бөттө һәм улар йәйәү йөрөүҙең ни икәнен дә онотто. Тап бына уларҙың ошо бик кәрәкле хәрәкәт, физик әүҙемлек менән дуҫ булмауҙары килтерә лә инде ҡорһаҡ үҫтереүгә.

Әлбиттә, көҙгә ауырлығы артыуҙың һәм һимеҙлектең сәбәптәре бик күп: нәҫелдән бирелгән "мираҫтан" алып, кешенең йәшәү рәүеше - туҡланыу тәртибе, физик әүҙемлеге һәм башҡалар. Көҙгә ауырлыҡтары арта барыусылар хаҡындағы бер интернет-хәбәргә кемдер, уйынлы-ысынлы: "Тимәк, мул йәшәй башлағанбыҙ!" - тип комментарий яҙа һалып та ҡуйған. Ә бит табиптар һәм диетологтар раҫлауынса, йәмғиәттә һимеҙлек күренеше күпләп арта башлай икән, бында инде ниндәй ҙә булһа социаль фактор ҙа ғәйепле. Тимәк. Был сир, ғөмүмән, күп ашауға әллә ни бәйле лә түгел, иң төп сәбәп - бер төрлө һәм арзан аҙыҡ-түлек менән туҡланыуҙа. Мәсьәлән, республикала үткәрелеп торған тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, республика халҡының рационы тигеҙлек нисбәте булмаған, күбеһенсә икмәк, макарон изделиелары, картуф, колбаса, шәкәр кеүек аҙыҡ-түлек менән туҡланыуҙан ғибәрәт, сөнки халыҡтың аҡсаһы фәҡәт ана шундай арзан аҙыҡ-түлеккә китеп тора. Ә инде төрләндереп, сифатлы ит, йәшелсә, сыр, емеш-еләккә - ғәфү итегеҙ, диетологтар, - беҙҙең кесә ягы һай.

Эйе, икмәктән айырмаһын Хоҙай, картуфы - икенсе икмәгебеҙ ҙә булһын. Тик һуңғы ваҡыт интернетта әлеге диетолог-нутрициологтар... икмәк ашамаҫҡа ҡуша! Уны нисек кенә хурламайҙар! Ҡайҙандыр глютен тигәне лә килеп сыҡты. Дөрөҫ, бөгөнгө икмәк менән беҙҙең әсәйҙәр бешергән һәм беҙ май һылап, шәкәр һибеп ҡулдан төшөрмәй ашап йөрөгән икмәк араһында айырма бик ҙурҙыр. Ни тиһәң дә, экология, химик ашламалар, пестицидтар ризыҡ сифатын бик ныҡ боҙа. Өҫтәүенә, был "сифат"ҡа икмәк заводтары үҙ өлөшөн индерә: тәмләткестәр, ҡамыр ҡабартҡыстар, пальма майы, маргарин һ.б. нәмәләр ҡуша. Хәҙер бит ауылдарҙы ла ошондай заводтар тәьмин итә, шуға күрә икмәкте өйҙә үҙеңә бешереп ашау хәүефте бер аҙға ғына булһа ла кәметәләр, ләкин сеймал - иген сифаты ниндәй - уныһы инде икенсе мәсьәлә...

Ошо йәһәттән аҙыҡ-түлек сифатын яҡшыртыу, дөрөҫөрәге, мөмкин тиклем зарарһыҙландырыу маҡсатында республикала күпләп етештерелеүсе ризыҡ составына май, шәкәр, тоҙ һәм башҡа "тәмләткес"тәрҙе күпләп ҡушмайынса ғына бешереү мәсьәләһе күтәрелә, тик был әлегә закон нигеҙендә түгел, ә мәғлүмәти-пропаганда кимәлендә генә ҡуҙғатыла. Ә беҙҙәге етештереүселәрҙең үҙ продукцияларын теләһә ниндәй яһалма тәмләткестәр менән һатып алыусыны йәлеп итерлек итеп һәм шул арҡала хаҡтарын ҡиммәтләндереп һатырға теләүҙәрен агитация менән түгел, хатта бер ниндәй закон менән дә тыйып булмаясағы билдәле: уларға килем кәрәк.

Һүҙ ыңғайында шул да мәғлүм булһын ки: ошо көндәрҙә генә Росстат йыл башынан Башҡортостанда хаҡтары иң ныҡ ҡиммәтләнгән аҙыҡ-түлек исемлеген асып һалды. Мәсьәлән, ғинуарҙан алып картуфтың хаҡы - 51,2 процентҡа артҡан, ә шулай ҙа сентябрь аҙағында уның килограмын 36,78 һумға һатып алырға мөмкин булған. Һуғандың хаҡы -20 процентҡа (килоһы 34 һум), һарыҡ ите - 15,5 (725 һум), икмәк 14 процентҡа (80 һум), алма -14 (116 һум), аҡ май - 13 (865 һум), һөт - 9,3 ( литры 73,77 һум), эремсек 9,2 процентҡа (394 һум) артҡан. Ә бына 4 октябрҙә Башҡортостанда бер аҙ арзанайған 5 төр ризыҡ хаҡтары мәғлүм булды: әлеге лә баяғы картуф 3,6 (!) процентҡа арзанайып, килоһын 35,40 һумға алырға мөмкин булған; һуған 6 процентҡа (килоһы 31,83 һум), кәбестә - 3 процентҡа (31 һум), сәй - 2,48 процентҡа (килоһы 1157,84 һум), алма 2 процентҡа (114 һум). Көҙгө уңыш мәлендә әллә ни муллыҡ билдәһе тип әйтеп булмай шул быны барыбер...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# УЙҘЫҢ ТЕЛЕ БАРМЫ?



**Был донъяның ҡыҙыҡ мәлдәре күп инде ул. Иҫемдә, беренсе синыфта уҡығанда рус телен өйрәнә башланыҡ. Шул саҡта башыма бер уй килде: рустар ниндәй телдә уйлай икән? Бына мин, башҡорт балаһы булараҡ, башҡорт телендә уйланам. Уйҙың теле бармы икән? Шунан рус телендә уйлап ҡарарға булдым. Юҡ, килеп сыҡмай ҙа ҡуя. Барыбер тәүҙә башҡортса уйланыла, һуңынан тәржемә ителә.**

Ә әле, олоғайған көндәремдә, яҡын-тирәмдә (Өфөнөң Черниковка өлөшөндә йәшәйем) башҡорттар бик һирәк осрай, шуға гел русса һөйләшергә тура килә. Шул сәбәпле, саҡ ҡына русса уйларға ла өйрәндем шикелле. Тик мин нығыш кешемен. 70 йәшлек инәй булһам да, китапхананан башҡорт гәзит-журналдарын алып уҡып барам. Магазинға инһәм, юрый һатыусыға башҡортса өндәшәм. Араларында мине аңлаусылар ҙа осрай. Аңламағандарына тәүҙә башҡортса өндәшәм дә үҙемдә үк русҫаға тәржемә итәм. Әлбиттә, башҡорт булыуым менән ғорурланам һәм һәр ерҙә гүзәл башҡорт телмәре ағылып тороуын теләйем. Шундай йомшаҡ, наҙлы бит ул башҡорт теле.

Хәйер, кеше рус телендә уйлаймы, әллә бүтән телдәме - уныһы мөһим түгел. Иң мөһиме - уйҙарының ниндәй булыуы. Яҡшылыҡмы уның уйында, әллә яуызлыҡмы? Тағы ла берҙе уйлап, икенсене һөйләп, өсөнсө төрлө ҡылыҡтар ҡылмаһын ине кеше. Шундайҙар күбәйеп бара бит...

**Айгөл АХУНОВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# АШХАБАДТА, ШУНАН ҠАҘАНДА...



● "Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр ғәйәт ҙур һәм тамырынан үҙгәрештәр осорона инә... Бөтөн планетаның төрлөлөгөн сағылдырыусы яңы донъя тәртибе формалаша. Һәм был тәбиғи процесты туҡтатырлыҡ түгел. Финанс һәм сәйәси йоғонтоға эйә иҡтисади үҫештең яңы ҡеүәтле үҙәктәре барлыҡҡа килә һәм улар иң тәүҙә бында - дөйөм Көнсығыш менән дөйөм Көньяҡта барлыҡҡа килә" ,- тине Рәсәй Президенты Владимир Путин 11 октябрь Ашхабадта булып үткән "Замандар һәм цивилизациялар бәйләнеше - тыныслыҡ һәм үҫеш нигеҙе" тигән форумда. Төркмән шағиры, философ, төркмән әҙәбиәте классигы Махтумкулиҙың тыуыуына 300 йыл тулыуға арналған был йыйында ун дәүләттән, шул иҫәптән, Рәсәй, Әрмәнстан, Иран, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Монголия, Пакистан, Үзбәкстан, Тажикстан президенттары һәм Төркиәнән парламент рәйесе ҡатнашты. Рәсәй Президенты үҙенең телмәре һуңында форумда ҡатнашыусыларҙы 22-24 октябрҙә Ҡазанда үтәсәк БРИКС саммитына саҡырҙы. Мәғлүм булыуынса, ошо йыл башынан БРИКС составы яңы ағза-илдәр - Египет, Эфиопия, Иран, Сәғүд Ғәрәбстаны иҫәбенә арта бара. Әлеге көндә Сербия ла был берекмәгә ҡушылырға ниәтләй. Был илдең вице-премьеры Александр Вулин Berliner Zeitung гәзитенә биргән интервьюһында БРИКС-ты "Евросоюзга реаль альтернатива" тип атаны. Сербия Ҡаҙандағы саммитта мотлаҡ ҡатнашасаҡ, тине ул.

● МХО хәлдәренә килгәндә, шул да мәғлүм булһын: Рәсәй армияһы Махсус хәрби операция зонаһының Запорожьенан алып Купянскийға тиклемге йүнәлешендә һөжүмдәрен дауам итә. Курск өлкәһе буйынса хәрби эксперт Олег Царев хәбәр итеүенсә, Рәсәй ғәскәрҙәренең киң ҡоласлы һөжүм хәрәкәттәре туҡталғаны юҡ. Глуховский районының көньяғы дошман ҡалдыҡтарынан таҙартылды. Любимовка янында Украина ғәскәре ҡамауға алынды. Украинаның хәрби көстәре дәүләт сиге һыҙығына ҡыҫырыҡлана.

● Әсиргә төшкән украин хәрби хеҙмәткәре Альберт Григорович һөйләүенсә, ул махсус подразделениеға әләгә һәм химик ҡорал етештереү лабораторияһында Рәсәй һалдаттарына ҡаршы ҡулланыу өсөн ағыулы матдәләр тултырылған зарядтар етештереү менән шөғөлләнә. "Беҙ шулай уҡ дрондар ярҙамында ташлау өсөн шартлаҡыстарға хлорпикрин тултырҙыҡ. Был ағыуҙан һаҡланыу өсөн противогаздар ярҙам итмәй, химик ҡорал ташланған урынды тиҙерәк ташлап китергә кәрәк", тип һөйләй ул. Григорович эшләгән лаборатория көнөнә химик матдә менән яһалған 160-200-ләп төрлө типтағы һәм ауырлыҡтағы гранаталар эшләп сығара. Көтөлмәгән һөжүм осраҡтарынан һаҡланыу өсөн был мобиль лаборатория бер нисә сәғәт эсендә йыйыла йә ҡорола ала.

● АҠШ конгресының вәкилдәр палатаһы спикеры Майк Джонсон NBC News телеканалына интервьюһында белдереүенсә, Америка халҡының иң беренсе проблемаһы - ундағы тормоштоң үтә ҡиммәтләнеүе. Икенсе мәсьәлә - миграция кризисы. Был бәләлә Камала Харристың ғәйебе ҙур, ти спикер. Демократик ҡараштағы штаттар һәм округтар халҡы ла ошондай фекерҙә. Америка халҡын борсоусы тағы бер сәбәп бар - АҠШ-тың донъя аренаһында көсһеҙләнеүе. Джонсон бында ил президенты Джо Байден менән уның яҡын ярҙамсыһы Камала Харристы ғәйепләй. Әйткәндәй, һуңғы көндәрҙәге йәмәғәтселек фекере буйынса Дональд Трамп менән Камала Харристың кандидатураларын яҡлаусылар кимәле тигеҙләште: икеһенең дә 48-әр процент тауыш тәшкил итә. Президент һайлауҙарына ни бары өс аҙна самаһы ваҡыт ҡалыуын иҫләһәк, был күрһәткестәр ярайһы ҡыҙыу көнәркәшлек хаҡында һөйләй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Башнефть" яғыулыҡ ҡойоу станцияларында бензин ҡиммәтләнгән. Хәҙер АИ-92 автоһауаҫҡарҙарға - 51,85 һумға (+5 тин), АТUМ-92 52,95 һумға (+5 тин), АТUМ-95 56,45 һумға (+10 тин) төшә. Дизель яғыулығының хаҡы ғына үҙгәрмәгән - бер литры 63,85 һум тора. "Башнефть" компанияһында 6 октябрҙә генә хаҡтар арттҡайны. Шулай итеп, 28 майҙан башлап яғыулыҡтың хаҡы 19-сы тапҡыр күтәрелгән.

✓Башҡортостандың элекке транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Клебанов судҡа тиклемге килешеү төҙөнө һәм икенсе фигурант тураһында мәғлүмәттәр бирҙе. Май айында ҡулға алынған экс-чиновник ришүәт алыуҙа ғәйепбен танылы, тиелә унда. Тәүтикшереү барышында Александр Клебановтың транспорт һәм юл хужалығы министры булған ваҡытта "Киви" йәмғиәте етәкселегенән дөйөм ҡурсалау өсөн 5 миллион һум ришүәт алыуы асыҡланды. Элекке чиновник 7 октябргә тиклем өйҙә һаҡ аҫтында ултыра.

✓Башҡортостанда октябрь рекорд менән башланды. Айҙың беренсе көнөндә Өфө-Дим аэрологик станцияһында термометр +23,2 градус күрһәтте. Был иһә ошо көн өсөн рекордлы күрһәткес, сөнки республикабыҙҙа иң йылы көн 1974 йылдың 1 октябре тип иҫәпләнә ине. Ул ваҡытта +21,5° булған. 2024 йылдың 30 сентябрендә температура ҡырҡ йыл элек теркәлгән рекордтан юғарыраҡ булды (+23,3°). 1984 йылда был көндә һауа температураһы +21,9° тиклем күтәрелгән. Синоптиктар фаразы буйынса, быйылғы октябрь ҡоро һәм йылы була.

✓"Алға" махсус иҡтисади зонаһы Рәсәй махсус иҡтисади зонаһының II ESG-рейтинғы лидерҙары исемлегенә инде. Уның һөҙөмтәләрен Дубнала халыҡ-ара махсус иҡтисади зона форумы сиктәрендә Рәсәйҙең Кластерҙар, технопарктар һәм Махсус иҡтисади зона ассоциацияһы (АКИТ) күрһәтте. Инфраструктура майҙансыҡтарында тотороҡло үҫеш принциптарын индереү рейтингында "Алға", уҙған йыл менән сағыштырғанда өс баҫҡысҡа күтәрелеп, етенсе урынды алды.

✓Башҡортостандың йәш бадминтонсылары Пермдә уҙған "Кама буйында көҙ" Бөтә Рәсәй ярыштарынан еңеү менән ҡайтты. Республиканың спорт министры Руслан Хәбибов спортсыларҙың биш алтын миҙал яулауы хаҡында хәбәр итте. Полина Петрова (ике тапҡыр), Данил Неганов, Иван Меркушов һәм Мартина Мартынова республика намыҫын лайыҡлы яҡланы. Башҡортостан бадминтонсылары командаһы иҫәбендә бөтәһе 20 миҙал. "Алтын"дан тыш, спортсылар биш көмөш һәм ун бронза миҙал менән бүләкләнде.

ҠЫҪҠАСА

# АГРОАУЫЛ ТӨҘӨЛӘ

**Башҡортостандың Шишмә районы Йәрми ауылында "Агроауыл" туристик кластерын төҙөү планлаштырыла. Инвестор уның макетын Мәскәүҙә "Алтын көҙ-2024" агросәнәғәт күргәҙмәһендә республика стендында тәҡдим итте.** Республика Хөкүмәте Петербург иҡтисади форумында "Таврос" идара итеү компанияһы менән проектты тормошҡа ашырыу тураһында килешеүгә ҡул ҡуйғайны. Уның хаҡы 850 миллион һумға баһалана, был - федераль, төбәк, урындағы бюджеттарҙың һәм инвесторҙың дөйөм аҡсаһы. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, беренсе этапта уртаса майҙаны 72 квадрат метрлыҡ 100 шәхси йорт, шулай уҡ инженер селтәрҙәре - газ үткәргес, электр тәьминәте, юлдар һәм тротуарҙар төҙөү планлаштырыла. Агроауыл проекты "Ауыл биләмәләрен комплексы үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

✓ **Башҡортостан медицина өлкәһендә яһалма интеллект (ЯИ) ҡулланыуҙы киңәйтә. Был хаҡта социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Айрат Рәхмәтуллин белдерҙе.** Уның һүҙҙәренсә, республикала табип ҡарарҙарына ярҙам итеү системаһы индерелә һәм яһалма интеллект ярҙамында поликлиникаларҙа сиратты анализлау технологияһына һынау үткәрелә. "Йыл аҙағына тиклем республикабыҙҙың алты медицина ойошмаһы "МосМедИИ" платформаһына тоташтырыла. Был платформалағы ЯИ-ҡарарҙары флюорография, маммография, рентгенография һәм күкрәк ситлеге ағзаларын КТ-ла тикшереү һөҙөмтәһендә алынған һүрәттәрҙе анализлай. Пилот проекты өсөн беҙ ЯИ-ның төрлө кимәлдәге эш һөҙөмтәлелеген баһаларлыҡ республика, район медицина ойошмаларын һайланыҡ. Уның йомғаҡтары буйынса был тәжрибәне башҡа клиникаларға таратыуҙы ҡарарбыҙ", - тине Айрат Рәхмәтуллин.

✓ **Өфө ҡала советы "Физик шәхестәрҙең милкенә һалым тураһында" һәм "Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡалаһында ергә түртым түләү хаҡы тураһында" ҡарарына үҙгәрештәрҙе раҫланы.** Үҙгәрештәр кадастр хаҡы 10 миллион һумдан ашыуыраҡ булған фатир, торлаҡ биналар һәм йорт хужаларына ҡағыла. Фатирҙарға, бүлмәләргә һәм йорттарҙың бер өлөшөнә ҡарата ставка 0,22 проценттан алып 0,3 процентҡа тиклем үҙгәрә. Торлаҡ йорттар һәм берҙәм күсемһеҙ комплекстар буйынса ставка яңынан ҡарала һәм 0,3 процент була (элек 0,24 процент ине). Һалым йөкләмәһе шунда уҡ түгел, ә әкренләп, Һалым кодексына ярашлы үҙгәрә. Шулай уҡ Рәсәй Федерацияһының Һалым кодексындағы үҙгәрештәргә бәйле кадастр хаҡы 300 миллион һумдан ашыу тәшкил иткән объекттарға һалым ставкаһы 2 проценттан алып 2,5 процентҡа тиклем арттырыла.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН...

**9-11 октябрҙә Башҡортостанда икенсе тапҡыр башҡорт теленән онлайн-олимпиада үтте. Унда 41 567 кеше ҡатнашты.**

Ҡатнашыусыларға олимпиаданың рәсми сайтында тест үтергә тәҡдим ителде: башланғыс кимәл - башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн. Уны 23 714 кеше һайланы; ирекле кимәл - башҡорт телендә иркен аралашҡан ҡатнашыусылар өсөн. Был кимәлде 16 335 кеше һайланы; башҡорт теленең диалекттары - башҡорт теленең диалекттары менән ҡыҙыҡһынған ҡатнашыусылар өсөн. Уны 1518 кеше һайланы. Айырыуса Өфө, Саҡмағош, Бәләбәй һәм Туймазы райондары халҡы әүҙемлек күрһәтте. Теркәлгән ҡатнашыусылар араһында Силәбе, Һамар, Ырымбур өлкәләре, Татарстан Республикаһы, шулай уҡ Мәскәү, Сорғот, Нижневартовск, Вязьма һәм Санкт-Петербург ҡалалары вәкилдәре бар ине. Бынан тыш, олимпиадала Үзбәкстан, Төркиә һәм Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәрендә йәшәүселәр ҙә ҡатнашты. Һәр ҡатнашыусы йыйылған балдар һаны аҙылған сертификат алды. Олимпиаданы Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы "Мираҫ" йәштәрҙең башланғыстарына булышлыҡ итеү фонды менән берлектә үткәрҙе. Проект Башҡортостан Республикаһы Башлығы грванттары фонды булышлыҡ итеү фонды менән берлектә Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырылды.

# БҮЛӘКЛӘҮ ИЛҺАМЛАНДЫРА

**Башҡортостанда 2024 йыл өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге журналистар премияһы лауреаттары билдәле булды. Тейешле бойороҡҡа Хөкүмәт премьер-министры вазифаһын башҡарыусы Андрей Назаров ҡул ҡуйған.**

Бына улар лауреаттар: "Ашҡаҙар" гәзитенең баш мөхәррире Рәмил Мансуров, махсус хәрби операция геройҙары тураһында мәҡәләләр циклы өсөн; "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһе Роман Якимчук, иҗтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади тематикаға материалдар өсөн; "Башҡортостан" телекомпанияһы журналистары коллективы Ләйлә Владимирова, Виталий Ермаков, Марс Камалетдинов, Дмитрий Каретко, Альбина Ҡасимханова, Нурислам Хәйриев, Айҙар Шәрипов, "Башҡортостан каникулдары" проекты өсөн.

Журналистарға Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһын тапшырыу тантанаһында республика Башлығы хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Азат Бадранов журналистарҙың "Хәҡиҡәт. Яуплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" премияһына ғаризаларын ҡарау барышы хаҡында һөйләне. Билдәле булыуынса, яңы премия 2023 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров указы менән булдырылды. "Радий Фәрит улы былтыр Башҡортостан Башлығының журналистика өлкәһендә "Хәҡиҡәт. Яуаплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" премияһын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Беренсе конкурстың ғаризалар тапшырыу кампанияһы тамамланды, конкурсҡа 90-ға яҡын эш ҡабул ителде. Был аҙнала конкурс комиссияһы үҙ эшен башлай. Ә Башҡортостан Республикаһы Башлығы премияһының тәүге лауреаттарын быйыл декабрҙә уҡ билдәләйбеҙ. Иң яҡшы 20 авторға 300-әр мең һум аҡса бирелә, - тип билдәләне Азат Бадранов һәм: - Республика етәкселеге журналистарға ярҙам күрһәтеүгә етди иғтибар бүлә. Был иждаға яңы этәргес булыр һәм республика журналистарын артабан да емешле эшләргә илһамландырыр", - тигән ышаныс белдерҙе.

# ЯҢЫ КИНОЛАР ТӨШӨРӨЛӨР

**2024 йылдың 19 июленән 19 августына тиклем Фонд 2024 йылда кинематография өлкәһендәге проекттарға ярҙам итеү өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантттары конкурсына ғаризалар ҡабул итте. Йәмғеһе 15 ғариза килде.**

Еңеүселәр иҫәбендә - республиканың биш ойошмаһы, уларҙың проекттары 50 миллион һумға баһаланды. Шуларҙың өсәүһе тәүге тапҡыр Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары фонды конкурстарында еңеүсе булды. Еңеүселәр 4 тулы метражлы фильм һәм бер анимация сериалы төшөрә. Гранттың максималь суммаһы түбәндәгесә: тулы метражлы фильм йәки сериал - 15 миллион һум; ҡыҫҡа метражлы фильм - 5 миллион һум. "Кинематографияны үҫтереү конкурсы икенсе йыл үткәрелә. Республикала кинематография индустрияһына ярҙам итеү бик мөһим, сөнки ул мәҙәни киңлекте үҫтерә һәм төбәктең ыңғай имиджын формалаштыра. Яңы проекттар тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итер, талантлы режиссерҙарға һәм сценаристарға үҙ идеяларын тормошҡа ашырырға мөмкинлек бирер тип көтәлә", - тине Фондтың конкурс комиссияһы ағзаһы, мәҙәниәт министры урынбаҫары Илнур Мөхийәнов.

Еңеүселәр:

-"Әлифба: һандар һәм ваҡыт" йәнһүрәттәр сериалы, ул 3-7 йәшкә тиклемге балаларҙы башҡорт теленә өйрәтә;

-Балалар учреждениеларында, шул иҫәптән етем балалар өсөн тәғәйенләнгән "Беҙҙе ҡалдырмағыҙ" нәфис фильмы. Яҙыусы Айгиз Баймөхәмәтов повесы буйынса балалар йортонда тәрбиәләнгән үҫмерҙәрҙең драматик тарихы;

-"Бер яндан осҡан уҡтар" нәфис фильмы реаль хәлваҡиғаларға нигеҙләнгән. Ваҡиғалар беҙҙең көндәрҙә бара.

# ФАЙҘАҒА БУЛҺЫН

**Башҡортостан һәм Ҡарағалпаҡстан (Үзбәкстандағы республика) колледждары етәкселәре урта һөнәри белем биреү өлкәһендә хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Башҡортостан белем биреү учреждениелары делегацияһының дуҫтарса мөнәсәбәттәге республикаға сәфәре барышында ошо хаҡта һөйләшеп килешелде. Был турала Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.**

Республикабыҙҙың урта һөнәри белем биреү учреждениелары халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте әүҙем үҫтерә. Башҡортостан колледждары Беларусь, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Абхазия, Үзбәкстандың уҡыу ойошмалары менән партнерлыҡ тураһында 20 килешеү төҙөгән. Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры вазифаһын башҡарыусы Илдар Мәүлетбирҙин һүҙҙәренсә, был белем биреү сифатын тәьмин итеүҙең мөһим механизмы булып тора. Ҡул ҡуйылған килешеү сығарылыш уҡыусыларының профессиональ компетенцияһын күтәреүҙе, бергәләп белем биреү программаларын әҙерләүҙе һәм тормошҡа ашырыуҙы, уҡытыусылар һәм студенттар өсөн стажировкалар ойоштороуҙы күҙ уңында тота. Сәфәр барышында Башҡортостан делегацияһы Ҡарағалпаҡстан дәүләт университетында һәм бер нисә сәнәғәт объектында булды.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан спортсылары грэпплинг буйынса өс тапҡыр донъя чемпионы булды, тип хәбәр итте республиканың спорт министры вазифаһын башҡарыусы Руслан Хәбибов. Өфөнән Алһыу Ғәлиева (тренеры Ислам Иҙрисов) "грэпплинг" һәм "грэпплинг-ги" бүлектәрендә ике тапҡыр чемпион исемен яуланы, Бөрйән районынан Илһөйәр Сәйфетдинова (тренеры Нур Усманов) "грэпплинг" бүлегендә еңеүсе булды. Башҡортостан спортсылары бөтәһе ете миҙал алды. Грэпплинг буйынса донъя чемпионаты Астанала 12 октябргә тиклем бара. Унда донъяның 30 иленән 1300-ҙән ашыу спортсы ҡатнаша.

✓Өфөнең Орджоникидзе районындағы Ладыгин урамы, 13/1 адресы буйынса урынлашҡан йортта шартлау яңырыраған һәм янғын сыҡҡан. Ҡорбандар юҡ. Өфө мэры Ратмир Мәүлиев һәм Орджоникидзе районы башлығы Рөстәм Хәмитов был йортта йәшәүселәр менән осрашты. Зыян күргән фатир хужалары әле ваҡытлыса урынлашыу пунктында. Ҡала башлығы белдереүенсә, зыян күреүселәргә бер тапҡыр 20 мең һум компенсация түләнә. Ә экспертиза баһалағандан һуң уларға фатирға килтерелгән зыян ҡаплана.

✓Өфөлә III квартал йомғаҡтары буйынса икенсел баҙарҙа уртаса фатирҙың (шартлы рәүештә 2 бүлмәле) уртаса хаҡы 6,12 миллион һум торған. Квартал эсендә хаҡ - 1,7 процентҡа, йыл башынан 3 процентҡа артҡан. "Фатирҙар донъяһы" федераль порталы мәғлүмәттәре шундай. Август йомғаҡтары буйынса Өфөлә яңы фатирҙың уртаса хаҡы яҡынса 7,2 миллион һум тәшкил иткән. Экспертттар фекеренсә, "беренсел" һәм "икенсел" торлаҡтың хаҡтары бер кимәлдәрәк була, сөнки яңы йорттарҙа льготалы ипотека юҡ. Күптәр IV кварталда кредиттарҙың ҡиммәтләнеүе ихтимал тип хәүефләнә һәм торлаҡ мәсьәләһен тиҙ арала хәл итергә тырыша, тип билдәләй аналитиктар.

✓Өфөнөң Октябрь районындағы "Ғаилә" скверы - Сәйет-Ғәлиев бульварында йәшәүселәр өсөн яңы күркәм урын. Бер йыл элек кенә был юл буйлап машиналар елдерһә, бөгөн бульварҙың көньяҡ яғы - тик йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән. Ул Октябрь проспектынан Комсомол урамына тиклемге юлды бер скверға берләштергән. Эш сәфәре барышында республика Башлығы Радий Хәбиров был урынды ҡараны һәм ҡала мөхите унайлы булырға тейеш, һәм был йүнәлештәге эште дауам итәсәкбеҙ, тип билдәләне.

✓30 сентябрҙән 10 тоннанан ашыу ауырлыҡтағы йөк машиналарына иҫке Затон күперенән йөрөү тыйылды. Улар өсөн яңы күперҙә ҡаршы йүнәлештә ситке яҡта һул һыҙат бүленгән. Был ҡарар яһалма ҡоролманың тузған булыуына бәйле ҡабул ителде, тип белдерҙеләр мэрияла. Затон күпере 53 йыл файҙаланыла, биш йыл элек уның хәле ҡәнәғәтләнерлек түгел тип танылды, ә яныраҡ үткәрелгән тикшереү авария хәлендә тигән ҡарар сығарҙы. Ауыр йөк машиналары өсөн күперҙә май айында уҡ ябырға тейештәр ине.

***✓ Ни өсөн йорт хайуандарын чипларға кәрәк? Был юғалған хайуандарҙы тиҙерәк табырға ярҙам итә. Әгәр юғалған эт приютҡа йәки ветеринария клиникаһына эләкһә хужаһы тураһында мәғлүмәт табырға мөмкин.***



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ИШЕҮСЕЛӘР ЯРЫШЫ ЛА БУЛА

**Өфөлә үтәсәк "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумы барышында ишеү слаломы буйынса "Ҡурай төбәге" халыҡ-ара ярыштары уҙғарыла.**

Был хаҡта Башҡортостан Спорт министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр иттеләр. Ярыштар Өфөнөң Инорс биҫтәһендә ишеү слаломы өсөн яңы комплекста була. Турнирҙа Рәсәйҙән һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренән (Белоруссия, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан) 120-нән ашыу спортсы ҡатнаша. Рәсәй командаһы составында Токиола Олимпия уйындарында ҡатнашҡан яҡташыбыҙ Алһыу Минәзева ла бар."Был халыҡ-ара турнир ишеү слаломы өсөн ҡоролмалар комплексында тәүге ҙур сара булмаҡсы. Яңы спорт объекты башҡа мөһим саралар үҙғәнә лә әүерелер тип ышанабыҙ", - тип белдерҙе Башҡортостандың спорт министры вазифаһын башҡарыусы Руслан Хәбибов.

# ҺЫЙЛЫ ӨҪТӘЛ

**Өфөнөң Туҡай урамында ҡала биләмәләрен төҙөкләндереү буйынса программаларҙы тормошҡа ашырыу сиктәрендә самауыр, һыйлы өҫтәл һәм көнбағыш төшөрөлгән яңы граффити барлыҡҡа килде.**

Һүрәтҡә "Өфө йүкәләре" йырынан өҙөк яҙылған. Картинаның авторҙары - ҡала рәссамдары Артур Лукьянов, Артур Музипов. Һуңғы ваҡытта Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында граффити ҡала киңлектәрен һәм инфраструктура объекттарын визуаль төҙөкләндереү өсөн әүҙем ҡулланыла. Мәҫәлән, күптән түгел Өфө аэропортының метеорология вышкаһы граффити стилендәге иллюстрациялар менән биҙәлде.

# ӘЛИӘ АЛТЫН МИҘАЛЛЫ!

**Яҡташыбыҙ Әлиә Мөхәмәтйәнова самбо буйынса донъя беренселегендә иң көслөһө булды.**

Ларнака ҡалаһында (Кипр) самбо буйынса донъя беренселеге тамамланды. Ярыш кадеттар (14-16 йәш), үҫмерҙәр (16-18 йәш) һәм юниорҙар (18-20 йәш) араһында спорт һәм хәрби самбо буйынса 55 ауырлыҡ категорияһында үтте. Яҡташыбыҙ Әлиә Мөхәмәтйәнова 50 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында тыуған иленең һәм республиканың намыҫын лайыҡлы яҡланы, алтын миҙал яуланы. Республиканың спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, спортсы ҡыҙ тренерҙар Елена һәм Станислав Орловтар етәкселегендә Өфөнөң Николай Гастелло исемендәге спорт мәктәбендә шөғөлләнә.

# АҺ, БЫЛ САМОКАТ!

**Өфөлә ике кикшеринг компанияһының 3,5 мең электр самокаты иҫәпләнә.**

Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында квадроциклдарҙы, питбайктарҙы һәм шәхси хәрәкәт итеү сараларын файҙаланғанда хәүефһеҙлекте тәьмин итеү темаһына арналған түңәрәк өҫтәлдә Өфө хакимиәтенең транспорт һәм элемтә идаралығы етәксеһе Илдар Сәлихов белдерҙе. "Граждандарҙың ғүмерен һәм һаулығын хәүеф аҫтына ҡуймаҫ өсөн самокатта йөрөү тыйылған биләмәләр билдәләнде. Улар - сәнәғәт зоналары, зыяраттар, парктар, скверҙар, йәмәғәт биләмәләре, балалар майҙансыҡтары. Якутов исемендәге паркты прокуратура менән берлектә самокат өсөн япҡыҡ, махсус билдәләр ҡуйылды", - тип хәбәр итте Илдар Сәлихов. Шулай уҡ ҡалала тиҙлекте сикләү индерелде, тип өҫтәне ул. Юл ситендә урынлашҡан 32-гә яҡын белем биреү учреждениеһы янында тиҙлекте сәғәтенә 15 километрҙан арттырмаҫҡа кәрәк. Был сикләү уҡыу процесы осоронда ғәмәлдә ҡала. 127 урам киҫелешендә - сәғәтенә 5 саҡрымдан, тағы 22 урам киҫелешендә 10-15 саҡрымдан арттырырға ярамай.

# БЕРӘҘӘК ЭТТӘРҘЕ ТОТОП...

**Өфөлә берәҙәк эттәрҙе тотоу дауам итә. Тотҡандан һуң уларҙы ветеринар тикшерә, шунан приютҡа урынлаштырыла, 14 көн карантинда була. Аҙаҡтан эттәр паразиттарға ҡаршы эшкәртелә, ҡотороуҙан һәм башҡа сирҙәрҙән вакцина һалына, стерилләштерелә һәм чип ҡуйыла. Агрессия күрһәтмәгән эттәрҙең барыһы ла кире ебәрелә.**

Ни өсөн йорт хайуандарын чипларға кәрәк? Был юғалған хайуандарҙы тиҙерәк табырға ярҙам итә. Әгәр юғалған эт приютҡа йәки ветеринария клиникаһына эләгә икән, сканер чиптан номерҙы уҡый һәм мәғлүмәт базаһынан хайуандың хужаһы тураһында мәғлүмәт табырға мөмкин. Контакт мәғлүмәт һорап, уның менән бәйләнешкә инергә мөмкин. Бынан тыш, күп илдәргә тик чипланған хайуандарҙы ғына индерергә рөхсәт ителә.

- Табылған эттәрҙә чип булыуы уларҙың эйәһен табыуҙы күпкә еңеләйтә. Бынан тыш, микрочип хайуанға милек хоҡуғын иҫбатларға һәм уны алмаштырыуға юл ҡуймаҫҡа булышлыҡ итәсәк, - тип билдәләнеләр подряд ойошмаһында.

Ҡабул ителгән эштәр күләменә ярашлы, 2024 йылда Өфөлә 1 июнгә ҡарата 2450-гә яҡын эт тотолған. Берәҙәк эт тураһында Өфө хакимиәтенең рәсми сайтында урынлаштырылған интерактив карта ярҙамында һәм ҡаланың берҙәм дежур-диспетчер хеҙмәтенә (телефоны+7(347)277-09-11 (доб.3) хәбәр итергә мөмкин.

**Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ТИҘ БАЙЫРҒА ТЕЛӘП...




**Һуңғы йылдарҙа республикала мутлашыусыларға бәйле енәйәти хәлдәр йыш осрай. Улар яңынан-яңы ысулдар таба. Мутлашыу - бөгөн иң таралған енәйәттәрҙең береһе.**

"Яҡынығыҙ аварияға осраны, тиҙ арала аҡса кәрәк", тип шылтыратыу йәки оло йәштәгеләргә төрлө хеҙмәт вәкилдәре булып, өйҙәренә килеп, уларҙың йыйған аҡсаларын алыу, уныһынан да хәүефлерәк ҙур сумма кредитҡа батырыу осраҡтары - бындай енәйәт схемалары инде һәр кемгә билдәле. Барыһы ла был хаҡта белә, әммә мутлашыусылар ҡорбаны булыуын дауам итә. Өлкән йәштәгеләр генә түгел, хатта юғары белемле, юғары дәрәжәле граждандар ҙа алданып ҡуя.

Сөнки мутлашыусылар кешене өгөтләй, ҡыҙыҡтыра белә. Мәкер ҡороусылар йылдам эшләй: бик әүҙем реклама алып бара, еңел байырға теләгәндәр йәки тиҙ ышаныусан, мөғжизәгә ышаныусы кешеләрҙән мөмкин тиклем күберәк аҡса туплай һәм, күп тә үтмәй, йыйылған сумма менән юҡҡа сыға.

Енәйәтселәр бер урында тормай, алдашыуҙың яңынан-яңы ысулдарын эҙләп таба. Улар заманса технологияларҙы - интернет, социаль селтәрҙәрҙе лә бик оҫта ҡуллана.

Һуңғы ваҡытта бигерәк тә граждандарҙы миллионлаған һумлыҡ кредиттарға батырыу күренеше йышайҙы. Шуныһы ғәжәп: банктарҙың енел генә шундай ҙур күләмдә заем биреүе һеҙгә шикле тойолмаймы ул? Кәрәк әйбергә кредит алам тип барһаң, уларға эш урының белешмәләр, түләү өсөн яуаплылар һорап аптырата торғайнылар. Хәҙер кешенең йөҙөн дә күрмәй, онлайн кредит бирәләр. 20-30 мең булһа, бер хәл. 10-15 миллионлыҡ кредит алған кеше банк хеҙмәткәрендә шунда уҡ шик уятырға тейеш! Аҡса алғанда ниндәй маҡсатҡа алыуы хаҡында ла һорарға тейеш банк.

Төрлө сайттарҙа, интернет-магазиндарҙа заказ биреп, аҡсаһынан ҡолаҡ ҡаҡҡандар күбәйҙе. Нисек тотоп йәки кейеп ҡарамай, затлы тиреле шөшке тунын йәки автомобиль алырға мөмкин?

Ҡапҡанға эләкмәҫ өсөн иң тәүҙә ойошмаларҙың әлеге эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеүгә лицензияһы йәки дәүләт реестрында теркәлеүе менән ҡыҙыҡһынырға кәрәк. Килешеү өлгөһө менән танышыу, бойондороҡһоҙ финанс йәки юридик консультацияға мөрәжәғәт итеү мөһим.

Һәр хәлдә, уяу булайыҡ, хәләл аҡсабыҙҙың бәрәкәтен күрәйек, яҡындарыбыҙҙы, ололарҙы мутлашыу ауынан аралайыҡ.

**Зәйнулла СОБХАНҒОЛОВ, юрист.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Боланут

❖ Атеросклероздан 2 ҡалаҡ боланут үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Эс киткәндә, дизентериянан 1 ҡалаҡ боланутҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5-6 минут ҡайнатырға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан эсергә.

❖ Хроник простатиттан 1 ҡалаҡ боланут үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда 1/3 стакан эсергә. Төнәтмәне простата биҙенә яһалған операциянан һуң да эсергә була.

❖ Яңы барлыҡҡа килгән яман ҡатламдарҙы иҫкәртеү өсөн 1 ҡалаҡ боланут үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнап торған һыу боҫонда 15 минут тоторға, бүлмә температураһында һыуытырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Синуситтан (танау яны ҡыуышлыҡтарының лайлалы тиресәһе шешеүе) 2 ҡалаҡ боланут үләненә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнатып сығарырға һәм 30 минут төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙандың һәм бөйән эсәге сей яраһы ауырыуынан 2 ҡалаҡ боланутҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға, бүлмәлә һыуытырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Был ауырыуҙы иҫкәртеү өсөн файҙалы, бигерәк тә көҙ һәм яҙғыһын көсәйгән мәлендә.

## Шифалы валериана

❖ Һалҡын тейҙергәндә 1-әр ҡалаҡ валериана тамыры һәм кейәү үләне, 2-шәр ҡалаҡ бөтнөк һәм һары мәтрүшкә, 250 грамм ҡара сәйҙе бергә ҡушырға. Шуның 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм таҫтамал менән ябырға. Был сәйҙе көнөнә 6-8 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа тәүге тапҡыр осраған ҡанатлы селтәрлеләр, филлеләр һәм япраҡ ашаусыларҙың ҡайһы бер төрҙәре беренсе тапҡыр Ҡыҙыл китапҡа индерелде.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡашҡабаш, таҙбаш**

**(Лысуха)**



Көүҙәһе, тышҡы ҡиәфәте менән тауыҡты хәтерләтә. Төҫө көлһыу ҙа, ҡара ла булыуы ихтимал. Түшендәге йөнө аҡһылыраҡ. Маңлайында "ҡашҡа"һы, "таҙ"ы бар, ҙур ғына аҡ тире ялтырап тора, исеме лә шунан. Йөҙгән саҡта аяҡтары ишкән һайын башын эйә. Ер өҫтөндә атлап йөрөй, хәүеф тыуғанда ҡыйы үлән араһына йәшеренә. 4 м тәрәнлеккә тиклем сума ала. Һыуҙан ауыр итеп, һәр ваҡыт елгә ҡаршы күтәрелә, 8-10 м йүгергәндән һуң еңел генә осоп китә. Кешенән ҡурҡмай, уны эргәһенә яҡын ебәрә.

Тауышы үҙенсәлекле, "терк", "тек", "кевк" тигәнерәк яңғырай. Көүҙәһенең оҙонлоғо 36-38 см, ҡанаттарының киңлеге - 70-80 см.

XIX быуат аҙағында Өфө губернаһының тигеҙлектәрендә йыш осраған ғәҙәти ҡош иҫәпләнгән. Ҡайһы бер күлдәрҙә улар йөҙәрләп оя ҡороп йәшәгән. Һуңғараҡ иҫәбе ҡапыл кәмегән, был тирмәндәре булған һыу ятҡылыҡтарының юҡҡа сығыуы, етеҙ тиҙлектә ҡалалар үҫеүе һәм ҡоштарға тыныслыҡ бөтөүе, күлдәрҙе төрлө маҡсатта ҡуллана башлау менән бәйле. Ағиҙел, Һаҡмар, Таналыҡ йылғаларында, Урал арьяғының ҡайһы бер күлдәрендә йәшәй.

Күлдәр боҙҙан әрселгәс, апрель урталарында осоп ҡайта. Ғәҙәттә, улар ҡышлау ерҙәренән үк парлашып ҡайта. Төнөн оса, шуға ла уларҙы төркөм менән осҡанын күреү һирәктәргә генә эләгә.

Улар оя ҡорған күлдең ҙурлығы, әселеге мөһим түгел, ҡашҡабаш һыу ятҡылығының ныҡ итеп ағып ятмауына өҫтөнлөк бирә. Ундай күл, быуа, һыуһаҡлағыстар һыу өҫтө үҫемлектәренә бай була. Ояларыла йөҙөп йөрөгән кеүек, әммә улар ниндәй ҙә булһа үҫемлеккә нығытылған була. Ояның диаметры 50-60 см. 7-10 йомортҡа һала, 20-22 көн баҫа. Яңы сыҡҡан бәпкәләр 5 сәғәттән һуң инәһенең артынан эйәреп һыуға төшә ала.

Үҫемлектәр менән туҡлана. Ҡайһы бер ваҡ бөжәктәрҙе лә ашай. Шулай ҙа төп аҙығы булып ваҡ һыу хайуандары тора.

Августың 20-ләре бәпкәләр ҡанат нығытып, башҡа күл-быуаларға осоп китеп бөтә. Йылы яҡҡа 10-15 сентябрҙә юллана. Беҙҙең ҡашҡабаштар Каспий диңгеҙендә, Үҙәк Азия һыуҙарында ҡышлай, Һиндостанға ла барып етә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ*

# ЙӘНЛЕКТӘРҘЕҢ ҮҘ КИТАБЫ...



**Башҡортостан йәнлектәренең Ҡыҙыл китабы яңыртылды. Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҙгәрештәр тураһында Башҡортостан Республикаһы Ҡыҙыл китабының баш мөхәррире, Өфө фән һәм технологиялар университетының биология һәм экология кафедраһы доценты Винер ХӘБИБУЛЛИН һөйләй.**

**➔ Винер Фәрит улы, Ҡыҙыл китап тураһында дөйөм мәғлүмәт ишетергә ине.**

- Китапта хайуан, ҡош һәм башҡа йәнлектәр исемлеге, уларҙың таралған урындары, иҫәбе, аҙайыу сәбәптәре, һаҡлау саралары тураһында мәғлүмәт туплана. Һирәк осрай торған һәм юғалыу ҡурҡынысы янаған хайуандар һәм ҡоштар исемлеге ун йылға бер тапҡыр төҙәлә. Үткән ун йыл эсендә яңы материал туплау, мәғлүмәттәрҙе дөйөмләштереү буйынса эш алып барылды. Төрлө тикшеренеүҙәр үткәрелде, экспедициялар ойошторолдо, хайуандарҙың үҫеш динамикаһы күҙәтелде. Ниндәй хайуандар һаны артҡан йәки, киреһенсә, кәмегән, быға тиклем Ҡыҙыл китапҡа индерелмәгән ниндәй яңы төрҙәр табылған, ә ҡайһылары юҡҡа сыҡҡан - бөтә ошо динамика Ҡыҙыл китапта сағылыш таба. Хайуандар тураһындағы Ҡыҙыл китап 2-се том тип атала. 1-се том Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҫемлектәр һәм бәшмәктәр исемлегенән тора. Әйткәндәй, 1-се том 2021 йылда яңыртылғайны.

Башҡортостандың Ҡыҙыл китабында 140 һирәк һәм юғалып барған хайуандар төрө теркәлгән. Уларҙың һәр береһе тураһында китапта рәсем менән тулыландырылған ентекле, тулы мәғлүмәт бирелгән. Ҡыҙыл китапта хайуандар исемлеге өс телдә - башҡорт, урыҫ һәм латин телдәрендә бирелгән, ә төп текст урыҫ телендә баҫылған. Баҫмала шулай уҡ хайуандарҙың таралыу картаһы менән дә танышырға була. Белешмәлә ҡоштарҙың - 51, бөжәктәрҙең - 56, имеҙеүселәрҙең - 19, һөйрәлеүселәрҙең - 6, үрмәксе һымаҡтарҙың бер һәм ерһыу хайуандарының бер төрө тураһында мәғлүмәт тупланған.

**➔ Әле генә донъя күргән Ҡыҙыл китап ниндәй төр хайуандар менән тулыланды?**

- Яңыртылған баҫмаға 47 яңы төр тәүге тапҡыр индерелгән, уларҙың 30-ы - умыртҡаһыҙ һәм 17-һе - умыртҡалы хайуандар. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре Рәсәй Ҡыҙыл китабының яңы баҫмаһынан күсерелде, ә ҡайһылары республика фаунаһын өйрәнеү һөҙөмтәһендә өҫтәлде, йәғни төбәк ғалимдары яңы төрҙәрҙе тапты, уларҙың һанын билдәләне һәм таралыуы тураһында мәғлүмәт тупланы. Айырыуса бөжәктәр исемлеге киңәйтелде. Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа тәүге тапҡыр осраған ҡанатлы селтәрлеләр, филлеләр һәм япраҡ ашаусыларҙың ҡайһы бер төрҙәре беренсе тапҡыр Ҡыҙыл китапҡа индерелде. Шулай итеп, яңыртылған баҫмала дала үләне күбәләге, колхида орсоҡ ҡеҫәрткеһе, ҡара ҡауҙы, осар тейен һәм башҡа төрҙәр тураһында мәғлүмәт уҡырға була.

Тәбиғи мөхиттәге торошона айырыуса иғтибар талап ителгән хайуандарҙың аннотациялы исемлеге лә төҙөлдө. Артабан улар хаҡында өҫтәмә мәғлүмәт туплау дауам ителеп, киләһе Ҡыҙыл китапҡа индереү-индермәү тураһында ҡарар ҡабул ителәсәк.

**➔ Ә исемлектән төшөп ҡалған хайуандар бармы?**

- Башҡортостан Ҡыҙыл китабының 2-се томының тулыландырылған һәм эшкәртелгән өсөнсө баҫмаһынан 21 хайуан төрлө сәбәптәр арҡаһында төшөрөп ҡалдырылды. Мәҫәлән, суфый синерткә, таңҡа иңкеш, оҫта ҡорт, үлән тәлмәрйендәренең һаны артыу сәбәпле, улар айырыуса һаҡлауға мохтаж түгел. Шулай уҡ иҫәп торошо буйынса яҡшы урында торған ҡара апполон күбәләге (мнемозин), шаршы күкене балығы яңы редакцияға индерелмәне.

Башҡортостан биләмәһендә һуңғы ун йыл дауамында йәшәүҙәре тураһында ышаныслы мәғлүмәттәр булмау сәбәпле, яңы баҫмаға медицина һөлөгө, сыбыҡ бөжәк, төньяҡ елбиҙәк күбәләге, эдип үлән күбәләге, энейс ютта күбәләге, оло ҡом себене, бикре балығы, йофар балығы тураһында мәғлүмәт алынды. Таксономик ревизия һөҙөмтәләре буйынса шулай уҡ ваҡ ҡолаҡ ярғанат исемлектән төшөрөп ҡалдырылды. Шулай уҡ яңыртылған Ҡыҙыл китапҡа осоусы ҡоштар - ҡыҙыл боғаҡ ҡара ҡаҙ, ыласын һымаҡтар отрядының ыласындар ғаиләһенә ҡараған балабан, ялан тәғәрләге - индерелмәне. Энәғараҡтар отрядының ысын энәғараҡтар ғаиләһенә ҡараған билдәш энәғараҡ бөжәге, быуа тәлмәрйене, ялан тәғәрләге ҡошо һандары артыу сәбәпле Ҡыҙыл китаптың яңы баҫмаһына эләкмәне.

**➔ Башҡортостан Ҡыҙыл китабының яңы баҫмаһын кемдәр эшләне?**

- Ҡыҙыл китап - республика биләмәһендә йәшәгән хайуандарҙың һирәк осраған һәм юғалып барған төрҙәре тураһында мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер рәсми фәнни белешмә. Уны эшләү ҙур яуаплылыҡ талап итә, китаптағы һәр мәғлүмәт ентекле өйрәнеүҙән һәм тикшереүҙән һуң ғына донъя күрә. Әлеге баҫма буйынса Өфө фән һәм технологиялар университетының зоологтары менән берлектә, республиканың башҡа ойошмалары һәм шулай уҡ Мәскәү белгестәре эшләне. Төбәктең ваҡытлы фәнни матбуғатында һәм iNaturalist платформаһында баҫылған материалдар һирәк осраған төрҙәр тураһында мәғлүмәт туплағарға ҙур роль мөмкинлек бирҙе.

Китаптың сағыу дизайн-проектын һәм версткалауҙы беҙҙең хеҙмәттәштәр - Өфө фән һәм технологиялар университетының Тәбиғәт һәм кеше институты белгестәре Салауат Казин һәм Дарья Костромина башҡарҙы. Баҫмалағы ҡайһы бер һүрәттәр ҙә ошо уҡ институттың студенттары тарафынан эшләнде.

**➔ Винер Фәрит улы, республикала ниндәй хайуан төрҙәрен һаҡлауға айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк? Ҡайһыларына юғалыу ҡурҡынысы янай?**

- Тәбиғәтте яратыу, хайуан-үҫемлектәрҙең бөтә төрөнә ҡарата ла иғтибарлы булыу мөһим. Ҡыҙыл китапҡа индереп кенә һирәк осрай торған йә булмаһа юғалып барған хайуандарҙы һаҡлап ҡалып булмай. Иң мөһиме - йәмғиәт уларҙың һәр береһен һаҡлау өҫтөндә эшләргә бурыслы, бөләкәйҙән һәр кем экологик аңлы булып үҫергә тейеш.

Улар кеше тарафынан юҡ ителә, ҡоштарҙың оялары, хайуандарҙың йәшәү урындары туҙҙырыла. Баҫыуҙарҙы эшкәртеүҙә ҡулланылған ағыулы матдәләр хайуандар, ҡоштарҙың ашаған үләндәренә зыян килтерә. Шулай уҡ браконьерҙар ҡулынан да күп хайуандар һәләк була. Балыҡтар өсөн йылға-күлдәрҙең таҙа булыуы мөһим.

Республикала эре йыртҡыс ҡоштар һәм йыландар (шулай уҡ йыланға оҡшаған аяҡһыҙ кеҫәрткеләр), бер йәки бер нисә урында ғына осраған эндемик төр бөжәктәр айырыуса һаҡлауға мохтаж. Тағы ла Европа шәшкеһенең һәм һары шәшкенең һаны ла бик аҙ, уларҙы махсус һаҡлау сараһы талап ителә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Иҫ киткес матур тәбиғәтле, бай флора һәм фаунлы төбәктә йәшәүебеҙ менән бәхетлебеҙ. Һәр кемдең уникаль тәбиғәтебеҙҙе һәм унда көн итеүселәрҙе һаҡлауға үҙ өлөшөн индереүе мөһим", - тине әңгәмә барышында Винер Фәрит улы. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

✓ *Ҡаҙан университеты ҡарамағына мосолмандар өсөн йыл һайын 12 мең һумлыҡ 20 стипендия булдырыу ҡарала. Был сара башҡорттарға ла ҡағыла, уларҙы тәүҙә Ҡаҙан гимназияһына ебәрәләр, унан һуң университетҡа күсереләләр.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф П.П. Сухтелен**

**(1830 - 1833 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Сухтелендың юллауы буйынса 1835 йылда иң юғары заттың рөхсәте менән Ҡаҙан университеты ҡарамағына мосолмандар өсөн йыл һайын 12 мең һумлыҡ 20 стипендия булдырыу ҡарала.

Был сара башҡорттарға ла ҡағыла, уларҙы тәүҙә Ҡаҙан гимназияһына ебәрәләр, унан һуң университетҡа күсереләләр; ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик аҙҙары ғына курсты тамамлай алды. Һуңынан бәғзе бер татар чиновниктары ошо стипендиялар иҫәбенә үҙҙәренең улдарын уҡырға ебәрә башлай, әммә ябай халыҡ университетта уҡырға теләүен бер нисек тә белдермәне.

Граф Сухтелендың кешеләргә ҡарата ниндәй гуманлы һәм ихтирамлы булыуы хаҡында бына ниҙәрҙе күрһәтеп үтергә була. Ул ваҡытлыса полицмейстер вазифаһын башҡарған бер шәхси приставтың уға иртән ҡалала барыһының да имен-аман булыуы хаҡында рапорт бирергә килгәнендә бигүк айыҡ булмағанын белеп ҡала. Бер аҙ эсеп алған хеҙмәткәрҙе ул атайҙарса шелтәләй, чиновниктың шундай эҫ менән начальствоға килеүен йүләрлек тип атап, киләсәктә уның менән бындай хәлдең булмаясағына ышаныс белдерә.

Ул көн һайын, кәрәк булған осраҡта, канцелярияның дежурный чиновнигының уға килеүен талап иткән. Был чиновниктар граф менән бергә иртәнге аш ашаған. Бер саҡ түбәнге вазифа биләгән бер чиновник дежурный була. Иртәнге аш алдынан бер кеше батмуста араҡы таратып йөрөгән һәм, башҡалар менән бер рәттән, әлеге чиновникҡа араҡы биргән. Рюмкаһын тотҡас, ул графтан һорай: "Минә закускаға күмәс бир әле". Граф йылмайып ҡына батмустағы ҡара һәм аҡ икмәккә, башҡа ҡабымлыҡтарға күрһәтә. Чиновник бындайҙы үҙендә лә, башҡаларҙа ла күрмәгән, бер аҙ ҡаушап китә һәм граф күрһәткән ҡабымлыҡты ала.

Казак ординарецы урядник Ваулин (дворян) эс бошоуҙан губернаторҙың лакейы менән танауға һуғып кәрт уйнай. Уйын тын ғына, тыныс ҡына бара: лакей еңелә, Ваулин уның танауына кәрт менән бәрә; әммә лакей ординарецтың танауына бәреү хоҡуғына эйә булғас, Ваулин лакей менән һуғыша башлай. Өйҙә тауыш сыға. Граф быны ишетеп ҡала, үҙенең бүлмәһенән сыға һәм, эштең ниҙә икәнен белгәс, Ваулинды ҡаты шелтәләй: дворянға лакей менән бәйләнешкә инеүҙең һәм кәрт уйнап һуғышыуҙың ниндәй әҙәпһеҙлек һәм түҙеп торғоһоҙ булыуы хаҡында иҫкәртә.

Граф Сухтелен, идара итеүе һәм эштәр менән шөғөлләнеүе аҙ ғына ваҡыт арауығында булыуға ҡарамаҫтан, казактарҙың хәрби эшен күтәреүгә иғтибар итә: ул ҡыштарын уларҙы өйҙәрҙә йыйып алырға бойора, унда инструкторҙар казактарҙы боролоштарҙы дөрөҫ яһарға, маршировкаға, ҡылыс менән честь биреүгә һәм уны һуғышта ҡулланыу алымдарына өйрәтә; атлы строй менән яҙ көнө, ашлыҡ сәсеү тамамланғас шөғөлләнәләр, ә йәйҙәрен ҙур маневрҙар була.

Мин атайымдың кордон һағында хеҙмәт иткән сағында беҙҙә, ике оло улын, ышаныслы кешеләр оҙатыуында аттарҙа маневрҙар ҡарарға ебәргәнен хәтерләйем. Сборҙа линия баталиондары, йәйәүле артиллерия, казактар, башҡорттар, ҡалмыҡтар һәм берме, икеме типтәр полкы, атлы казак артиллерияһы ҡатнаша. Маяҡтан ҡалаға йүнәләбеҙ, баҡса янында, һуңынан госпиталь эргәһендә туҡталабыҙ, ҡаланы Һаҡмар ҡапҡаһынан Чернореченский ҡапҡаһына һәм артабан Уралға тиклем уратып алалар, валдан пехота һөжүм итеүселәргә мылтыҡтарҙан ата, улар зарядка ҡом һәм ваҡ таш һала, кешеләрҙең битенә төҙәп аталар.

Асыуҙары ҡабарған башҡорттар һәм ҡалмыҡтар валға күтәрелә һәм ундағылар менән һуғыша башлай, уларҙың нагайкалары эшкә егелә. Шундай уҡ һаҡ Урал йылғаһы аша һалынған күперҙә лә ҡуйыла. Маневрҙар киске сәғәт алтыла тамамлана. Икенсе көндә бер нисә бәхетһеҙлек осрағы булыуы беленә: бер кешенең сүп кереүҙән ваҡытлыса күреү һәләте насарайыуы, аттарҙан осоп төшөп ғәрипләнеүселәр һәм шул саҡта һөйләүҙәренсә, бер казак артиллерисы зыян күргән, тупҡа зарядты төйгөсләп тултырып торған саҡта ул ҡулдарын алып өлгөрмәгән, һәм туптан осоп сыҡҡан зарядтан ике ҡулы ла өҙөлгән.

Граф Сухтелен Вознесенский сиркәүенә ҡаршы урынлашҡан Тимашев өйөндә йәшәй һәм үлә. Уны айырыуса ҙур ихтирам менән ерләйҙәр: парадта бөтөн ҡорал төрҙәре ғәскәрҙәре ҡатнаша, туптарҙан һәм мылтыҡтарҙан аталар; Шапошниковтың ҡарттар өсөн хәйриә йорто ҡаршыһында буш майҙан бар ине, һәм унда артиллерия ҡуйыла; туптарҙан атҡан ваҡытта байтаҡ ҡына өйҙәрҙең тәҙрә быялалары ҡырыла.

Сухтелен Петропавловский сиркәүенең ихатаһында ерләнә. Табутты алып барыуҙа үҙҙәренең ятраҡан начальнигына хөрмәт күрһәтергә теләгән халыҡ ҡатнаша

Бер нисә йылдан һуң Сухтелендың табутын уның ҡыҙы нәҫел төрбәһенә алып ҡайтып ҡуя; ҡәберҙә Гребень ташынан ҡая формаһында эшләнгән һәм мәрхүмдең ҡасан вафат булыуы яҙылған, алтын ялатылған таҡталы һәйкәл генә ҡала.

1835 йылда йә иһә унан һуңыраҡ ошо таҡтаны урлайҙар, моғайын, бур ул ҡиммәтлелер тип уйлағандыр.

Йәй көнө граф Сухтелен баҡсала йәшәй, бында хәҙер архиерей ихатаһы. Баҡса ул саҡта күпкә яҡшыраҡ ине. Ундағы эштәрҙе башҡорттар башҡара, ҡыштарын урядник һәм казактар ҡарауылға ҡуйыла.

Байрам көндәрендә Урал йылғаһы ашаһындағы сауҡалыҡта фейерверктар була; шунда уҡ музыка яңғырай, йырсылар сығыш яһай. Тантаналы көндәрҙә кистәрен тәҙрәләргә янып торған шәмдәр ҡуйыла, әммә киске сәғәт 10-ға тиклем генә, йыраҡраҡ частарҙа унан да алдараҡ һүндерелә. Бик һирәк өйҙәр: ҡаҙнаныҡылар һәм иң бай кешеләрҙеке плошкалар (эсендә филтәһе янып торған балсыҡ көршәктәр) менән яҡтыртыла

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ЕР АҪТЫНДА БЕР ҠАТ



**Өфөлә Әхмәтзәки Вәлиди урамын төҙөкләндереү барышында эшселәр тарихи объектҡа юлыҡҡан.**

Ҡаҙыу эштәрен башлағас, Ғиниәтулла Ҡапҡаев тотҡан килем йортонон ер аҫтында урынлашҡан бер ҡаты асылған. "Өфө ҡалаһының 450 йыллыҡ юбилейына әҙерлек барышында баш ҡалабыҙҙың бер нисә урамында, шул иҫәптән Зәки Вәлиди урамында төҙөкләндереү эштәре алып барыла. Мәҙәни мираҫ объекты булған йортта ҡаҙыу эштәре һөҙөмтәһендә уның ер аҫтында тороп ҡалған тотош бер ҡаты булыуы асыҡланды. Әлеге ваҡытта мәҙәни мираҫ объектын һаҡлап алып ҡалыу өсөн бинаның фасадын, ҡыйығын ремонтлау, цоколь ҡатын ныҒытыу эштәре башҡарыла", - тип яҙа Киров район хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов.

Зәки Вәлиди урамы, 67-се йорт адресы буйынса теркәлгән бина 1910-1911 йылдарҙа һалынған. Уның бай тарихы бар. Ул XX быуат башындағы революцияға тиклем Мосолмандарҙың Дини йыйылышы ағзаһы, Өфө ҡалаһының беренсе йәмғиәт мәсете муллаһы Ғиниәтулла Ҡапҡаевтың милеге була. Ул, шул ваҡытта етеш тормошта йәшәгән башҡа ҡала кешеләре кеүек, ошо бинаның бүлмәләрен ҡуртымға биреп, килем алған. Өйҙең планына ярашлы, өс подъезлы бинаның айырым инеү урындары була. Бинала Ҡапҡаев магазин тота. Совет власы йылдарында элекке килем йорто ҡәҙимге торлаҡ итеп файҙаланыла. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында бинаның беренсе ҡатындағы берҙән-бер магазинда яҡын-тирәлә йәшәгән кешеләргә карточка буйынса икмәк һатылған, Фрунзе урамы буйлап оҙон сираттар хасил булған.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Ошо уҡ бойороҡ менән II дәрәжә Ватан һуғышы ордены менән бүләкләнәләр: 58-се гв. атлы полкының танкҡа ҡаршы истребитель батареяһы командиры, гв. өлкән лейтенанты Федосеев Анатолий Григорьевич (Өфө районының Березовка ауылынан), ул элегерәк ике орден менән наградланған була. Уның батареяһы Браллентин районында барған алышта дошмандың бер танкыһын, 2 станковый пулеметын, бер взводтан артыҡ пехотаһын сафтан сығара; 148-се гв. артминполкының 2-се батареяһы тоҫҡауысыһы, гв. сержанты Донаев Акмурад, милләте буйынса төркмән (Төркмән ССР-ының Марый өлкәһенән). 10 февралдә Гутсдорф районында Таммин ауылы өсөн барған алышта орудиеһы уты менән немецтарҙың зенит пушкаһын, 2 станковый пулеметын емертә. 17 февралдә Фельдварк районында дошмандың 2 танкыһын сафтан сығара; 148-се гв. артминполкының 2-се батареяһының орудие командиры, гв. сержанты Сарыев Ата, төркмән, (Ашхабад өлкәһенән.). 10 февралдә Гутсдорф районында орудиеһының уты менән дошмандың зенит пушкаһын, 2 станковый пулеметын юҡ итә. 17 февралдә Мариенфельде районында ике урта танкыны емертә; 148-се гв. артминполкының 1-се батареяһының орудие командиры, гв. сержанты Хәмиҙуллин Хәбиб Сәмиғулла улы, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булған (Өфө ҡалаһынан). 16 февралдә Репплин ауылы районында дошмандың танкылар менән көсәйтелгән бер батальон самаһы пехотаһының контратакаһын кире ҡағыуҙа ҡатнаша, тура тоҫҡап, 2 урта танкыны сафтан сығара; 148-се гв. артминполкының миномет взводы командиры, гв. лейтенанты Хәсәнов Сафа Хузям улы, башҡорт (Стәрлебаш районы Өмөтбай ауылынан). Фронтта 1942 йылдың июленән, контузия алған һәм яраланған. СССР Юғары Советы Президиумының 1944 йылдың 15 ғинуарындағы Указы менән уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. 1945 йылдың 16 февралендә Браллентин районында, һөжүм итеп килгән дошман пехотаһына ут асып, уның 30 һалдатың сафтан сығара, Арнсвальдеға табан барған автомашинаны яндыра; 148-се гв. артминполкының миномет расчеты командиры, гв. өлкән сержанты Яҡупов Ҡотой Яҡуп улы, элегерәк Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән (Белорет районы Ассы ауылынан). 16 февралдә Браллентин районында миномёттан ут асып, дошмандың 20-гә яҡын һалдатын һәм офицерын юҡ итә, расчеттары менән 2 станковый пулеметын сафтан сығара.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Кеше гендарының үҙенсәлектәрен, йә иһә мутацияларын ентекләп асыҡлап булһа, медицина фәне ошо гендарҙы "төҙәтеп", генетик сәбәптәр менән бәйле ауырыуҙарҙы дауалау алымдарын ҡуллана аласаҡ.*

# Әҙәм нисек бар булған,

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - ХӨСНӨТДИНОВА Эльза Камил ҡыҙы. Ул - билдәле Рәсәй ғалимы, генетик, юғары мәктәп уҡытыусыһы. Рәсәй Мәғариф академияһының ағза-корреспонденты, БР Фәндәр академияһы академигы, биология фәндәре докторы, профессор. Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре. Башҡортостан Республикаһының Фән һәм техника өлкәһендәге дәүләт премияһы лауреаты. Популяциялар һәм медицина генетикаһы өлкәһендә Рәсәй Федерацияһының төп белгестәренең береһе.**

**Хөрмәтле Эльза Камил ҡыҙы! Мин беренсе һорауымды бер аҙ ситтәнерәк башлар инем. Совет йылдарында Юрий Чичков яҙған бер йыр бик популяр булды. Унда шундай һүҙҙәр бар: "Нимәнән һуң, нимәнән һуң беҙҙең малайҙар яһалған? Нимәнән һуң, нимәнән һуң беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ яһалған?" Ошо һорауҙар балаларса тойолһа ла, уларға бик етди итеп яуап бирергә булалыр. Әҙәм балаһы нисек бар булған, ул нисек йәшәй һәм үҫешә - хәҙерге заман фәне ошо проблема буйынса тикшеренеүҙәрҙе туҡтатмай. Бына нисек бит ул: ғалимдар микродонъя, атом серҙәрен асты, йыһан киңлектәрен байҡай, үҫемлектәрҙе һәм хайуандарҙы ентекләп өйрәнә, ә беҙ әлегә тиклем үҙебеҙҙең биосоциаль асылыбыҙҙы ахырынаса аса алмағанбыҙ кеүек. Кеше - тере тәбиғәт донъяһының иң бейек баҫҡысында тора, уның биологик асылы ысынлап та бик ҡатмарлы. Ошо темаға бәйле фекерҙәрегеҙҙе уҡыусыларыбыҙға еткерһәгеҙ ине.**

- Кеше биологияһын ентекләп өйрәнеүсе бер фән тармағы бар - ул генетика. Генетика - бик ҡыҙыҡлы һәм ғәжәпләндерерлек асыштар яһаусы фән, ул, кеше биологияһын ғилми яҡтан тикшереп, бик күп һорауҙарға яуап таба ала. Мин шулай тип әйтер инем: генетика кеше организмына бәйле бөтөн нәмәләрҙең эске, күҙгә күренмәгән торош-хәләтен, биологик ҡанундарҙың асылын аса ала бөгөн. Ер йөҙөндәге барса тереклектең йәшәйеше ДНК - дезоксирибонуклеин кислотаһы тип аталған биологик матдә нигеҙендә ҡорола, тере организмдар өсөн ул быуындан-быуынға бирелә торған нәҫел сифаттарын билдәләүсе мәғлүмәттәр бәрәмеге булып тора. ДНК нуклеотидтарҙан хасил була, уларҙың дөйөм иҫәбе 3 миллиардтан ашыу. ДНК-ла кеше организмын билдәләүсе барса биологик мәғлүмәт тупланған - ул енси күҙәнәктәр ҡушылыуынан башлап нисек үҫешә, тыуа һәм йәшәй, йәшәү мөхитенең ыңғай һәм кире факторҙары тәьҫиренә нисек яуап бирә, ниндәй сирҙәргә бирешә йә иһә иммун системаһы ярҙамында ҡаршы тора ала, айырым кеше организмына төрлө химик матдәләр, мәҫәлән, шул уҡ дарыуҙар ҡайһылай итеп тәьҫир итә - быларҙың барыһын да нәҫелдән бирелгән сифаттар билдәләй. Хатта кешенең темпераменты, холҡо, когнитив сифаттары, иғтибары, хәтере һәм фекерләү үҙенсәлектәре лә кеше гендарына һалынған нәҫел мәғлүмәттәре менән бәйле булыуы асыҡланды. Кешене уратып алған тәбиғәт мөхитендә бихисап үҫемлектәр бар, уларҙың шытып сығыуынан алып орлоҡ биреүгенә тиклемгә үҫеше шул уҡ ДНК менән билдәләнә.

**Образлы итеп әйткәндә, быны генетикалағы "да Винчи коды" тип атап булалыр ул?**

- Ер йөҙөндәге барса тереклектең - микроорганизмдарҙың - вирус һәм микробтарҙың, бактерияларҙың, үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең, хайуандарҙың һәм кешеләрҙең һәр береһенең генетик коды бар. Ул код әлеге ДНК спиралдәрен формалаштырған гендар аша һәр бер организмға бирелә, шуға күрә шул уҡ вирустарҙың, микроб-бактерияларҙың генетик кодын аныҡ итеп өйрәнә һәм аңлай алһаҡ, аҙәми заттарға хас булған байтаҡ ҡына сирҙәрҙе генетик юл менән иҫкәртеп һәм дауалап буласаҡ. Кеше гендарының үҙенсәлектәрен, йә иһә мутацияларын ентекләп асыҡлап булһа, медицина фәне ошо гендарҙы "төҙәтеп", генетик сәбәптәр менән бәйле ауырыуҙарҙы дауалау алымдарын ҡуллана аласаҡ.

**Заманса генетика фәненең тармаҡтары күп, улар, дөйөмләштереп әйткәндә, кешелек киләсәгенең нисек, ниндәй сифатта булыуын билдәләй алыу мөмкинлегенә эйә. XIX быуатта йәшәгән монах-ғалим, генетика өлкәһен асыусы Менделдән һуң уҙған дәүерҙе, атап әйткәндә, XX быуатты, ошо фәндең сәскә атыуы осоро, тип атарға була. Әлеге көндә генетика фәненең ниндәй асыш-ҡаҙаныштарын айырыуса әһәмиәтле тип әйтергә була?**

- Хәҙерге заман генетикаһы иң элгәре кеше гендарын өйрәнеүҙе иң төп мәсьәлә итеп ҡабул итә. Һәм тап ошо йүнәлештә ғәйәт күп асыштар эшләнә, ә яҡын киләсәктә улар тағы ла күберәк буласаҡ. 2000 йылдар башында "Кеше геномы" тип аталған программа ҡабул ителгәйне. Ул байтаҡ ваҡытты, донъя генетиктарының ҡатмарлы һәм ентекле ғилми эшен, заманса инструментарий, йәғни махсус йыһаздар, ҡорамалдар, лабораториялар булыуын талап итә. Кешенең генетик кодын, образлы итеп әйткәндә, китап уҡыған һымаҡ уҡып өйрәнеү мөмкинлеге бар. Тик был "китаптың" хәрефтәре иҫ китмәле күп - улар 3 миллиард парлы нуклеотидтарҙан тора, унда һәр айырым кешенең биологик асылы, үҙенсәлектәре, сифаттары "яҙылған". Әгәр кеше геномын әлеге "китап" итеп күҙ алдына килтерһәк, уны һыйҙырыу өсөн, яҡынсалатып әйткәндә, бер 100 томлыҡ энциклопедия кәрәк булыр ине. Тәүге осорҙа айырым кешеләр геномының ҡаралама варианты төҙөлдө. Йылдан-йыл кеше геномын тикшереү, асыу буйынса башҡарылған эштәр арта барҙы. Ниндәйҙер сирҙәргә дусар булған кешеләрҙең, айырым этник популяцияларҙың, төркөмдәрҙең геномдары өйрәнелде. Беҙ биологик яҡтан бер төрлө түгелбеҙ, кешеләрҙең геномдары араһында ла айырмалар етерлек. Мәҫәлән, башҡорттарға ғына хас этник сифаттарыбыҙ бар икән, халҡыбыҙ геномы башҡа этностарҙыҡынан бер ни тиклем кимәлдә айырылып торасаҡ. Әлеге ваҡытта ниндәйҙер бер "урталаштырып" ҡаралған кешенең генә түгел, һан яғынан да ҙур ғына кешеләр массивының геномдары уҡылды. Мин был һанды яҡынса 200 миллиондан да кәм түгел, тип уйлайым.

Тағы ла бер мөһим генетик проблема буйынса эштәр башҡарылды - ул нәҫелдән килгән, ата-әсәһенән балаға күскән генетик сирҙәрҙе өйрәнеү, асыҡлау һәм артабан уларҙы нисек итеп дауалап була икәненә төшөнөү. Гендарҙа мутациялар барлыҡҡа килә, улар нәҫел ебе буйынса күсә бара. Ниндәй мутациялар нәҫел сирҙәре өсөн яуаплы икәнен белгән хәлдә сирлеләргә ярҙам итә алыу юлдарын табып буласаҡ.

**Әйткәндәй, киң билдәле нәҫел сирҙәренең береһе - гемофилия. Батша Романовтар тоҡомонда булған был сир менән Николай II-нең улы Алексей ауырый...**

- Ул Англия королеваһы Викторияның алыҫ тоҡомо. Был осраҡта X-хромосомалағы мутация королева Викторияла барлыҡҡа килгән, тип иҫәпләнә. Был сир менән ҡатын-ҡыҙҙар ауырымай тиерлек, тик улар ошо сиргә килтерә торған мутацияны йөрөтөүселәр.

Фенилокетонурия тип аталған нәҫел сире баланың аң эшмәкәрлеген тотҡарлай. Был сир ҙә ген мутацияһы менән бәйле. Әгәр баланың атаһы һәм әсәһендә берәр генә "боҙоҡ" ген булһа, улар үҙҙәре сирләмәй, һау кешеләр тип һанала. Тик бына уларҙың балаларына бер юлы ике мутант ген эләкһә, уларҙа ошо нәҫел сире мотлаҡ буласаҡ. Ғаиләлә шундай бала тыуған икән, был ата-әсәләргә тәүҙә үҙҙәренә, һуңынан, икенсе балалары тыуа икән, уға ла мотлаҡ генетик экспертиза эшләтеү фарыз. Сир иртәрәк беленһә, уны тиҙерәк дауалап була.



*Әгәр кеше геномын әлеге "китап" итеп күҙ алдына килтерһәк, уны һыйҙырыу өсөн, яҡынсалатып әйткәндә, бер 100 томлыҡ энциклопедия кәрәк булыр ине. Тәүге осорҙа айырым кешеләр геномының ҡаралама варианты төҙөлдө. Йылдан-йыл кеше геномын тикшереү, асыу буйынса башҡарылған эштәр арта барҙы. Ниндәйҙер сирҙәргә дусар булған кешеләрҙең, айырым этник популяцияларҙың, төркөмдәрҙең геномдары өйрәнелде. Беҙ биологик яҡтан бер төрлө түгелбеҙ, кешеләрҙең геномдары араһында ла айырмалар етерлек. Мәҫәлән, башҡорттарға ғына хас этник сифаттарыбыҙ бар икән, халҡыбыҙ геномы башҡа этностарҙыҡынан бер ни тиклем кимәлдә айырылып торасаҡ. Әлеге ваҡытта ниндәйҙер бер "урталаштырып" ҡаралған кешенең генә түгел, һан яғынан да ҙур ғына кешеләр массивының геномдары уҡылды. Мин был һанды яҡынса 200 миллиондан да кәм түгел, тип уйлайым.*

***✓ Һәр халыҡта үҙенсәлекле мутациялар спектры билдәләнә: башҡорттарҙа булғандары менән, мәҫәлән, буряттарҙыҡы тура килмәй. Шуға күрә генетик сирҙәрҙең сәбәптәрен тикшергәндә этник факторын иҫәпкә алыу кәрәк.***



# БАЛАҺЫ...

## нисек йәшәй һәм үсешә?

2022 йылға кеше геномын тулыһынса тиерлек секвенлаштырыу (ДНК-лағы нуклеотидтарҙың тулы теҙмәһен билдәләү) тамамланды. Шулай уҡ үсемлектәрҙең, микроорганизмдарҙың, бактерияларҙың, вирустарҙың геном системалары асыҡланды. Беҙ хәҙер уларҙың ниндәй гендары булыуын, тере организмдарҙа нимә өсөн яуаплы булыуын беләбеҙ. Кешенең байтаҡ ҡына генетик сирҙәренең сәбәптәре билдәләнде, шулай уҡ йөрәк-ҡан системаһы, аллергия, шул уҡ ҡурылдай астмаһы сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә ниндәй гендар яуаплы булыуы асыҡланды. Тимәк, бала тыумаҫ борон, йә иһә ул бик бәләкәй булғанда уҡ генетик тестар уҙғарыу мөмкинлеге бар. Ә был уны дауалай башлар өсөн бик мөһим. Йәнә, генетик экспертиза нигеҙендә кешенең һаулығын уның гендарын ҡулланып төҙәтеү алымдары барлыҡҡа килде. Был осраҡта ген инженерияһы алымдары ярҙамға килә. Мәҫәлән, миодистрофия, гемофилия сирҙәрен дауалау өсөн ген методикалары бар. Мутант генды зарарланмаған ген менән алыштырып була. Мукавицидозды (киста фиброзын) дауалағанда, мәҫәлән, ген препаратын сирленең танауына һалалар.

**▸ Ә кеше яралғыһын эмбриональ осорҙа уҡ ген инженерияһы алымдары менән дауалап буламы?**

- Әлегә юҡ, бының өсөн тейешле тикшеренеүҙәр уҙғарылмаған, махсус алымдар ҡулланыу методикаһы эшләнмәгән, шуға күрә ыңғай яуап биреп булмай. Мәҫәлән, киң таралған сирҙәрҙән миокард инфаркты, гипертония, шәкәр диабеты кеүек сирҙәр күп факторҙар арҡаһында барлыҡҡа килә. Быны айырым гендарҙың роле менән генә аңлатыу дөрөҫ булмаҫ, гендар ҙа бер-береһе менән бәйле, ә мутациялар насар экология, уңайһыҙ социаль шарттар, дөрөҫ туҡланмау кеүек кире тәьсирле факторҙар һөҙөмтәһендә хасил була икәне билдәле.

**▸ Генетика фәне ике быуат самаһы арауыҡты үҙ эсенә ала. Әлбиттә, асыш-ҡаҙаныштар етерлек. Быны ошо иҫ китмәле фән XXI быуатта киләсәккә бөйөк юлын башлап ҡына торғандай тойола. Ошо үтә ҡыҙыҡлы фән өлкәһен киләсәк фәне тип атаһаҡ, килешер инегеҙме?**

- Әлбиттә. Мин шундай сағыштырыу ҡулланыр инем. Быны горизонтта вулкан ҡалҡып тора. Беҙ уның түбәһен генә күрәбеҙ. Ә ошо түбә аҫтында ниндәй процестар барғаны хаҡында беҙ белеп бөтмәйбеҙ әле. Әлеге медицина генетикаһына күҙ һалһаҡ, бына нимә асыҡлана: кешелек йөҙәрләгән сир менән ауырый, фармацевтар әллә күпме дарыуҙар етештерә. Ә ни өсөн берәүҙәргә килешкән дарыу икенселәргә йүнләп ярҙам итмәй? Шул уҡ анальгинды миҫалға алайыҡ. Ул һеҙҙең баш ауыртыуын бөтөрһә лә, минең организмға әллә ни файҙаһы юҡ. Сөнки беҙҙең генетик үҙенсәлектәребеҙ шундай. Кеше геномында 25 мең "эшсе" ген бар, улар организмдың күҙәнәктәренә кәрәкле төрлө аҡһымдарҙы кодлаштырыусы ролен үтәй. Унан башҡа модификациялаусы гендар ҙа бар, улар төп гендарҙың эшмәкәрлеген көсәйтә йә кәмәтә ала. ДНК сылбырындағы ошондай меңәрләгән гендар кешенең генотибын билдәләй, уларҙың һәр береһенең функциональ билдәләнеше, тәғәйенләнеше бар. Гендарҙың варианттары күп һәм, мәҫәлән, уларҙың кеше һаулығына нисек йоғонто яһауын медицина генетикаһы асыҡлай. Был өлкәлә ғилми эштәр әллә нисә быуатҡа етерлек.

**▸ Һеҙ персоналаштырылған медицинаны үҫтереү хаҡында ниҙәр әйтер инегеҙ?**

- Бына, әйтәйек, табиптар кешеләрҙе бер үк төрлө дарыуҙар менән дауаларға күнеккән. Ә был дөрөҫ система түгел. Беҙҙең организмдарыбыҙ, геномдарыбыҙ бер төрлө түгел. Бер кешегә яраған дарыу икенсе берәүҙә, мәҫәлән, аллергик ҡуҙғыу барлыҡҡа килтерә, ул дарыу организмға зыян ғына итә. Йәнә бер миҫал: инфарктты профилактикалау өсөн клопидогрел тәҡдим итәләр. Һеҙҙең геномдар өсөн ул файҙалы булһа, икенсе кешенең организмы, тимәк, генетик системаһы өсөн уның файҙаһыҙ булыуы ла бар. Ә бәғзе бер кеше өсөн шул дарыу бик зыянлы булып, уның организмына кире тәьсир итеүе мөмкин. Бер яҡтан, яңы дарыуҙарҙы ҡулланғанда бик һаҡ булырға кәрәк булһа, икенсе яҡтан, уларҙың кеше геномына ниндәй йоғонто яһауын асыҡлау мөһим. Әлегә ваҡытта 200-ҙән ашыу дарыу төрҙәренең кеше гендарына кире тәьсир итеүе асыҡланған.

**▸ Һуңғы йылдарҙа кешенең генетик паспорты булырға тейеш тигән ҡараш формалашты. Һеҙ был фекерҙе нисек баһалайһығыҙ?**

- Ыңғай баһалайым. Донъяның ҡайһы бер илдәрендә, Мәскәү ҡалаһында теләүселәргә генетик паспорт эшләп биреүсе фирмалар бар. Әммә бындай паспорт дөрөҫ тултырылырға тейеш. Унда ысынлап та ниндәйҙер бер сир менән бәйле гендарҙы күрһәтеү фарыз. Юғиһә, ғилми әҙәбиәттә күрһәтелгән берәй генды алалар ҙа, теге йәки был кешелә ундай гендың булыу-булмауын теркәйҙәр. Алдараҡ әйткәнебеҙсә, геномдың этник һүрәтләнеше лә бар. Төрлө этник төркөмдәрҙә бер үк гендар ошо халыҡтарҙың теге йәки был сиргә бирешеүсәнлеген автоматик рәүештә билдәләмәй, сөнки уларҙа бер үк сир менән бәйле гендар бер-береһе менән тап килмәй. Мәҫәлән, апилипопротеин Е - 4-кә 4 варианты булһа, теләһә ниндәй халыҡ вәкиленә йөрәктең ишемик ауырыуы, миокард инфаркты янаясаҡ, тип фекер йөрөткән табиптар бар. Был ген рус кешеләре өсөн хәүефле булһа, яҡуттар өсөн һис ҡурҡыныс түгел: ул был халыҡтың йөрәк-ҡан ауырыуҙары менән бәйле түгел. Үзбәк йә иһә әзербайжан кешеһе Мәскәүҙә генетик тест үткәндән һуң уларға: "Һеҙҙә шундай-шундай ген табылды, ә был йөрәк-ҡан патологияһына килтерә", - тип әйтеүҙәре мөмкин. Һәр бер осраҡта ла теге йәки был ген кешенең билдәле бер сирҙәргә бирешеүсәнлеген аңлатмай.

Йәнә бер нәмәгә иғтибар итеү мөһим: гендарҙың мутациялары арҡаһында ниндәйҙер сиргә бирешеү күҙәтелә. Ә һәр халыҡта үҙенсәлекле мутациялар спектры билдәләнә: башҡорттарҙа булғандары менән, мәҫәлән, буряттарҙыҡы тура килмәй. Шуға күрә беҙ генетик сирҙәрҙең сәбәптәренә арналған тикшеренеүҙәребеҙҙә этник факторҙы мотлаҡ иҫәпкә алыу кәрәклеген иҫбатланыҡ. Ғөмүмән, әлеге осорҙа популяциялар генетикаһына иғтибар ҙур, төрлө йүнәлештәрҙә ғилми тикшеренеүҙәр алып барыла.

**▸ Үсемлектәр, хайуандар генетикаһы буйынса ла бер ни тиклем мәғлүмәт биреп китһәгеҙ ине. Әлеге ваҡытта ГМО, йәғни генетик яҡтан модификацияланған организмдар тураһында белмәгән кеше һирәктер. Бындай организмдар ген инженерияһы алымдары ярҙамында барлыҡҡа килә. Бер яҡтан ҡарағанда, быны ла фәнни һәм ғәмәли генетиканың бер ҡаҙанышы тип баһалап була: ошондай юл менән кешелек үҙен тулыһынса аҙыҡ-түлек менән тәьмин итә алыр ине. Шул уҡ ваҡытта ауыл хужалығы продукттарын етештереүселәрҙең күпселеге һатыуға сығарылған аҙыҡ-түлек хаҡындағы мәғлүмәттәргә "ГМО-һыҙ продукт" тигән билдәләмә ҡуя. Кешеләр ни өсөн ГМО-лы аҙыҡ-түлектә ҡулланыуҙан ҡурҡа һуң?**

- Ғөмүмән, кеше организмы уны даими рәүештә аҡһым менән тәьмин итеүҙе талап итә. Аҙыҡ-түлек сифатында ҡулланылған үсемлектәр һәм хайуандар - төп аҡһым сығанағы. Шул уҡ үсемлектәрҙең сифатын яҡшыртыу, продуктлылығын арттырыу маҡсатында уларҙың генотибы реконструкциялана, йәғни уларға ниндәйҙер икенсе бер үсемлектәрҙән алынған гендар өҫтәлә. Мәҫәлән, ҡоролоҡҡа, йә иһә артыҡ дымлы шарттарға бирешмәгән үсемлектәрҙе ген инженерияһы алымдары менән үҫтереп-үрсетеп була.

ГМО-ның кеше организмына зыянлы булыу-булмауы әлегә билдәһеҙ. Был проблеманы уны ҡулланған кешеләрҙең кәмендә илле быуыны йәшәгән арауыҡта уҙғарылған ғилми тикшеренеүҙәр аша хәл итеп була. Шуға ҡарамаҫтан, ГМО-лы продукттар Африкала, Америкала, Рәсәйҙә лә етештерелә һәм ҡулланыла. Сағыштырыу өсөн икенсе бер миҫал килтерәйем. Ҡайһы бер нәҫелдән бирелгән сирҙәр менән яфаланғандарҙы геномды редакторлау алымы (CRISP-Cas системаһы) ярҙамында дауалай башланылар. Был алымдың асылы шунда: ауырыу кешенең геномына боҙолған ген урынына нормаль ген индерелә, башҡа бер манипуляциялар эшләнә. Маҡсатҡа ярашлы, сирле кеше һауығырға тейеш. Әммә геномды редакторлау процесында ҡайһы бер гендарҙа мутациялар башланыуы, геном спиралендә гендарҙың урынынан күсеүе асыҡлана. Ә бындай үҙгәрештәрҙең кеше организмына нисек тәьсир итеүен ғалимдар әлегә белмәй. Бының өсөн үтә ентекле һәм оҙайлы, иң кәмендә 20 - 30 быуын арауығында, тикшеренеүҙәр уҙғарыу фарыз. Шунһыҙ объектив һығымта яһап булмаясаҡ. Был хәлдәр ҡәҙимге медицинала ла күҙәтелә. Ҡайһы бер дарыуҙарҙы 50 - 60 йыл ҡулланғас ҡына уларҙың кеше организмына килтергән зарары асыҡланып, уларҙы етештереү тыйыла.

Бына тағы ла бер миҫал. АҠШ-та оҙаҡ йылдар дауамында йөклө ҡатындарға енелсә тынысландырыу маҡсатында талидомид тигән дарыу бирәләр. Ә уның зарарлы тәьҫире тыуасаҡ баланың геномын боҙоуы 30 йылдан һуң ғына беленә. Һөҙөмтәлә донъяға байтаҡ ҡына ғәрип балалар тыуа, уларҙың ҡулдары йә аяҡтары булмай. Шул уҡ Америкала кеше үлеменең өсөнсө урында торған сәбәбе - дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡулланмау. Әлеге ваҡытта бындай аяныслы хәлдәрҙе булдырмау маҡсатында фармакогенетика өлкәһендә ғалимдар әүҙем эшләй. Кеше гендарына теге йәки был дарыуҙың зарарлы булыу-булмауы билдәләнә.

**▸ Тағы ла бер һорау. Кешеләр, башлыса, бер үк төрлө сирҙәр менән ауырый. Үҙҙәрен насар һиҙә башлағас, табипҡа баралар, диагностика уҙғарыла, дауалау саралары күрелә. Был бар илдәр медицинаһы өсөн уртаҡ алгоритм. Образлы итеп әйткәндә, ҡәҙимге медицина "сирҙәр ҡойроғо" артынан һөйрәлә. Был алгоритмды генетика ярҙамында үҙгәртеү мөмкинме һуң?**

- Алдараҡ әйтеп үткәйнем, гендарҙың төрлө кешелә төрлөсә булыуы мөмкин. Улар вариантлы була. Гендың бер варианты кеше һаулығына зыян килтермәһә, икенсе бер варианты ниндәйҙер бер ауырыуға бирешеүсән итә. Әгәр ҙә беҙ генетик медицинаның фәнни һәм ғәмәли кимәлен заманса үҫтерә алһаҡ, барса ауырыуҙарҙы ла иҫкәртә аласаҡбыҙ. Бер генә сир ҙә гендар ҡатнашлығынан башҡа башланмай. Әгәр ҙә һәр кешенең геномын тикшереп, уның ниндәй сирҙәргә бирешеүсәнлеген ауырый башламаҫтан уҡ билдәләй алыуға өлгәшһәк, дөйөм медицина алгоритмы алышынасаҡ. Генетик экспертизанан һуң табип-генетик пациентына "насар" гендары уны теге йәки был сиргә дусар итмәүенә өлгәшеү өсөн ентекле тәҡдим-ҡағиҙәләр бирә ала. Әлбиттә, кеше бер ҙә сирләмәй тормай, әммә табип-генетиктар ниндәй дарыуҙарҙы ҡулланыу, туҡланыу, ял итеү, хәрәкәт гармонияһы, стрестарҙан нисек сығыу һ.б. мәсьәләләр буйынса белгес ролен үтәргә тейеш.

***Әлеге медицина генетикаһына күҙ һалһаҡ, бына нимә асыҡлана: кешелек йөҙәрләгән сир менән ауырый, фармацевтар әллә күпме дарыуҙар етештерә. Ә ни өсөн берәүҙәргә килешкән дарыу икенселәргә йүнләп ярҙам итмәй? Шул уҡ анальгинды миҫалға алайыҡ. Ул һеҙҙең баш ауыртыуын бөтөрһә лә, минең организмға әллә ни файҙаһы юҡ. Сөнки беҙҙең генетик үҙенсәлектәребеҙ шундай. Кеше геномында 25 мең "эшсе" ген бар, улар организмдың күҙәнәктәренә кәрәкле төрлө аҡһымдарҙы кодлаштырыусы ролен үтәй. Унан башҡа модификациялаусы гендар ҙа бар, улар төп гендарҙың эшмәкәрлеген көсәйтә йә кәмәтә ала. ДНК сылбырындағы ошондай меңәрләгән гендар кешенең генотибын билдәләй, уларҙың һәр береһенең функциональ билдәләнеше, тәғәйенләнеше бар.***

(Дауамы 10-сы биттә).

# ӘҘӘМ БАЛАҺЫ...

## нисек бар булған, нисек йәшәй һәм үҫешә?

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Генетиктар тирә-яҡ мөхиттең кеше һаулығы өсөн зыянһыҙ булыуына, экология торошон яҡшыртыуға ла булышлыҡ итә алалыр?**

- Бындай проблемалар менән экологик генетика шөғөлләнә. Әйтәйек, беҙҙәге күп кенә сәнәғәт предприятиеларындағы экологик ситуация маҡтанырлыҡ түгел. Ә эшселәр эшкә урынлашҡанда ҡәҙимге медицина справкаһын ғына килтерә. Зыянлы экологик шарттар аллергик, онкологик, йөрәк-ҡан системаһы һ.б ауырыуҙарға сәбәпсе фактор, әммә шул уҡ металлургия заводында эшләгән бар кеше лә сирлегә әйләнмәй. Ни өсөн? Һәр кемдең үҙенә генә хас геномы, генетик үҙенсәлектәре бар: кемдәндер гендарында мутациялар хасил булмай, улар тотороҡло, ә кемдеңдер гендары уны теге йәки был ауырыуға бирешеүсән итә. Шуға күрә кеше организмына кире экологик йоғонто яһаған предприятиеларға эшкә урынлашыусылар генетик экспертиза үтергә тейеш.

Бына икенсе бер миҫал. Был спорт экологияһына ҡағыла. Күп кенә балаларҙы бәләкәйҙән үк спорт мәктәптәренә бирәләр, ә унда колоссаль физик көсөргәнеш талап ителә. Билдәле бит, ҡайһы бер балаларҙың күнекмәләр ваҡытында, ярыштар барғанда кинәт кенә тын алышы хөртәйә, йөрәге туҡтала, үлем осраҡтары ла бар. Ана шул кәрәгенән артыҡ көс һалыу, организмды физик һәм психологик стресҡа индереү кешенең алдағы тормошондағы һаулығында нисек сағыласаҡ икәненә иғтибар юҡҡа тиң. Әлеге ябай медсправка ғына талап ителә. Спорт мәктәптәрендә, секцияларҙа шөғөлләнгән балалар бер ниндәй ҙә генетик экспертиза үтмәй. Һәр баланың физик үҙенсәлектәре, темпераменты, стресс ситуацияларына ҡарата тотороҡло йә бирешеүсән булыуы бар бит. Тап шуға күрә лә хатта бик билдәле спортсыларҙың йәшләй генә үлеп ҡалыу осраҡтары була.

**Кеше геномы менән бәйле бер ҡыҙыҡлы һорауға ла яуап эҙләп ҡарайыҡ. Боронғо замандарҙан, антик донъя дәүеренән бирле ҡәҙимге, ябай кешеләрҙән айырылып торған шәхестәр күп булған. Аристотель, Сократ кеүек фекер эйәләре, тарихсы Геродот, б.э. тиклем йәшәгән билдәле драматургтар, скульпторҙар, Ҡытай философтары һәм тарихсылары, бөйөк Көнсығыштың суфый шағирҙары, урта һәм һуңғы быуаттарҙың билдәле рәссамдары, композиторҙары, музыканттары, йырсылары, яҙыусылары, ғилем эйәләре, уйлап табыусылары, табиптары - уларҙың барыһында ла талант тигән шәхси сифат хас. Быны генетика фәне нисек аңлата икән?**

- 1869 йылда үҙе лә ғәйәт талантлы ғилем эйәһе, тәүге генетиктарҙың береһе булған Френсис Гальтон "Таланттың нәҫелдән булыуы: уның закондары һәм эҙемтәләре" тигән китап сығара. Хәҙергесә әйткәндә, ул талант генетикаһына нигеҙ һалыусы ғалим. Ул ошо әҫәрендә 400-гә яҡын иң талантлы шәхестәрҙең генеалогияһын анализлап, һығымталар эшләй. Унынса, иң элгәре нәҫелдән бирелгән билдәле бер сифаттарҙың булыуы, артабан тәрбиә һәм уҡытыу, шәхси ижади эшмәкәрлек - тыумыштан һәләтле кешеләрҙең талант эйәләренә әйләнеүе өсөн иң кәрәкле шарттар. Тормошта шулай ҙа була: бала һәм йәш сағында һәләттәрен үҫтереү өсөн тейешле шарттар булмаған кеше лә, олоғайып, хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына ижади эшмәкәрлеген башлай һәм йәмғиәттә танылыу таба, ижади эштәре юғары баһа ала.

***Күп кенә балаларҙы бәләкәйҙән үк спорт мәктәптәренә бирәләр, ә унда колоссаль физик көсөргәнеш талап ителә. Билдәле бит, ҡайһы бер балаларҙың күнекмәләр ваҡытында, ярыштар барғанда кинәт кенә тын алышы хөртәйә, йөрәге туҡтала, үлем осраҡтары ла бар. Ана шул кәрәгенән артыҡ көс һалыу, организмды физик һәм психологик стресҡа индереү кешенең алдағы тормошондағы һаулығында нисек сағыласаҡ икәненә иғтибар юҡҡа тиң. Әлеге ябай медсправка ғына талап ителә. Спорт мәктәптәрендә, секцияларҙа шөғөлләнгән балалар бер ниндәй ҙә генетик экспертиза үтмәй. Һәр баланың физик үҙенсәлектәре, темпераменты, стресс ситуацияларына ҡарата тотороҡло йә бирешеүсән булыуы бар бит. Тап шуға күрә лә хатта бик билдәле спортсыларҙың йәшләй генә үлеп ҡалыу осраҡтары була.***

Шәхес һәләттәрен үҫтереү менән бәйле проблемаға ла туҡталып китәйек. Балалар мәктәпкә 1-се класҡа уҡырға килә, уларҙың һәр береһенең тәбиғи (генетик) булмышына ярашлы, айырым үҙенсәлектәре, мөмкинлектәре, теге йәки был өлкәлә мәйелле булыуы, әүәҫлеге була. Уҡыусыларҙың берәүҙәре математика, физика, химия предметтарын тиҙ һәм сифатлы үҙләштерә алһа, икенселәре гуманитар фәндәргә ылыға һәм уңыш ҡаҙана, өсөнсөләре - музыка, рәсем төшөрөү яғынан алдынғы була, дүртенселәре физкультура, спорт яғынан һәләтле була. Ә уларҙың барыһын да бер уҡыу пландары, бер үк программалар буйынса уҡыталар. Атап әйткәндә, беҙҙең педагогик система унификация принцибында эшләй. Һөҙөмтәлә һәр класс өс төркөмгә бүленә: "бишле"гә өлгәшеүселәр, уртаса уҡығандар һәм артта ҡалыусылар. Әлбиттә, бындай системала бала үҙенең генетик булмышы менән бәйле һәләттәрен тейешенсә үҫтерә алмай. Һығымта шундай: уҡыусыларҙы, һәләттәренә ҡарап, айырым йүнәлешле кластарға бүлеп уҡытыу файҙалыраҡ. Йәнә бер тәҡдимем шунан ғибәрәт: персоналләштерелгән уҡытыу системаһына күсә алһаҡ, беҙҙең мәғариф донъя кимәлендә иң алдынғылар рәтендә буласаҡ.

Мине "Рәсәй белем биреү академияһы"на ағза-корреспондент итеп һайлағайнылар. Яңыраҡ Академияның Президиумында сығыш яһаным. Академия президенты Ольга Васильева балаларҙың математик һәләттәренең генетик нигеҙҙәре тураһында мәғлүмәт биреүҙе үтенгәйне. Ул үҙе лә дөйөм белем биреү өлкәһендә персоналләштереп уҡытыу яҡлы. Проблема БДИ системаһында уҡыусыларҙың математика буйынса күрһәткестәренең түбәнәйә барыуы менән бәйле. Талаптар юғары, уҡыусыларҙың байтағы математика фәнен юғары кимәлдә үҙләштерә алмай. Сығышымда кеше геномында математика өлкәһен тиҙ һәм сифатлы үҙләштерә алыу мөмкинлеген биргән билдәле бер гендарҙың булыуы хаҡында ла аңлатма бирҙем. Әммә һәр баланың үҙ геномы, үҙ гендары системаһы, шулай булғас, математика буйынса балаларҙың һәләттәре бер тигеҙ булмай. Тимәк, математика фәне индивидуалләштерелеп уҡытылырға тейеш.

Ғөмүмән, кешеләрҙең когнитив функцияларының генетик нигеҙҙәрен өйрәнеү бик мөһим. Рәсәй белем биреү академияһының Психология институты менән берлектә Мәскәүҙә "Когнитив геномика" тип аталған лаборатория астыҡ, уны Психология институтының элекке директоры Малышко Лев Борисович етәкләй. Тикшеренеүҙәрҙе финанслау өсөн грант оттоҡ. Темаларыбыҙ: "Когнитив функциялар нормала һәм патологияла", "Асоциаль ҡылыҡ гендары", "Агрессивлыҡ гендары", "Хәтер гендары", "Иғтибарҙы туплау гендары", "Математик һәләттәр гендары" һ.б.

**Генетика фәне өлкәһендә цифрлы технологияларҙы ҡулланып буламы?**

- Эйе, хәҙерге генетика фәнен һәм ғәмәлиәтен компьютер геномикаһы һәм информатика, IT-технологиялар, яһалма интеллект, машиналы уҡытыу, биоинформатика кеүек цифрлаштырылған методтарҙан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Элек кеше геномын өйрәнеү өсөн бик күп ваҡыт талап ителә ине. Кешенең генотибын асыҡлау өсөн ябай компьютер ғына аҙ. Беҙҙең фәнебеҙ гигант күрһәткестәр массивы менән эш итә, быны теркәү һәм анализлау өсөн суперкомпьютерҙар кәрәк. РФА Өфө фәнни үҙәгенең "Биохимия һәм генетика институты" мегагрант аҡсаһына ошондай компьютерҙар һатып алды. Беҙ бөгөн һәр кешенең геномын тиҙ арала тулыһынса асыҡлай алабыҙ, уның ҡайһы гендарында ниндәй мутациялар булыуы хаҡында тулы мәғлүмәт алыу мөмкин. Был бик мөһим, сөнки гендарында мутациялар булмаған кеше юҡ, уларҙы белгән хәлдә сирҙәрҙе иҫкәртеп тә, һәр кемгә тейешле медицина ярҙамы күрһәтеп тә буласаҡ. Быйыл көҙгә Өфө фән һәм технологиялар университеты ҡарамағында "Молекуляр медицина үҙәге" асылыуы күҙаллана, унда ДНК-диагностика уҙғарыу мөмкин буласаҡ. Түләүле нигеҙҙә һәр теләгән кеше үҙенең геномы һәм ниндәй мутациялар йөрөтөүе хаҡында тулы мәғлүмәт аласаҡ. Шулай уҡ һәр кемгә үҙенең генетик тарихын - ниндәй гаплотөркөмгә ҡарауын асыҡлай алыу мөмкинлеген бирә был үҙәк. Әлеге ваҡытта Республика медик-генетик үҙәгенә йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға бала тапҡанға тиклемге диагностика уҙғарырға ярҙам итәбеҙ.

**Яңы ғаилә ҡороусы йәштәргә ДНК-диагностика уҙғарыу хаҡында ни әйтерһегеҙ?**

- Минеңсә, ғаилә планлаштырыу үҙәктәрендә табип-генетик улар менән әңгәмәләшеп, ике яҡтан да нәҫелдәрендә ниндәй сирҙәр менән ауырыған кешеләр булыуын асыҡларға тейеш. Әгәр билдәле бер хәүеф бар икән, ул саҡта йәштәргә генетик диагностика үтеүҙе тәҡдим итергә кәрәк. Был уларҙың буласаҡ балаларының һаулығын ғына түгел, ғүмерен дә һаҡлау мөмкинлеген бирә.

**Популяциялар генетикаһы, этник генетика буйынса тикшеренеүҙәр ҡыҙыҡлы. Мәҫәлән, гаплотөркөмдәр аша туған халҡыңдың үтә алыҫ йәшәгән башҡа бер этностарға туғандаш икәнен аңлатып буламы икән?**

- Кешеләрҙең геномдарының структураһы бер үк, әммә гендарының варианттары бик күп. Минеңсә, был гаплотөркөм мәсьәләһенә берҙәй ҡағыла. Башҡорттарҙа асыҡланған гаплотөркөмдәр Азияла ла, Европала ла бик күп этностарҙа бар. Әммә был төркөмдәрҙең нисбәте төрлөсә. Унан һуң, Y-хромосоманы тикшереүҙең тәрәнлегенә иғтибар итеү кәрәк. Төпкәрәк төшә барған һайын гаплотөркөм бүлексәләренең таралыу ареалы кәмей. Мәҫәлән, Н гаплотөркөмөнөң 2-се бүлексәһе байтаҡ халыҡтарҙа осраһа, уның 200-сеһе тәрәнлегендәге бүлексәһе бик тар этник ареалда осрай. Митохондриаль ДНК буйынса тикшеренеүҙәр ҙә бик аҙ әле. Унан һуң, хромосомаларҙы тулыһынса секвенлаштырыу фарыз, ә был үтә ҡиммәтле процедура. Һығымталар эшләргә иртәрәк, ә геногеографик тикшеренеүҙәр дауам итә.

Быларға өҫтәп, "НК Роснефть" акционерҙар йәмғиәтенә ҡараған "Биотехнологик кампус" йәмғиәтенең 100 мең Рәсәй граждандарының тулы геномын асыҡлау планын иғлан итеүен билдәләп үтергә кәрәк. Проектты ғәмәлгә ашырыу өсөн 22,5 млрд һум аҡса бүленә. Был ҙур һәм бик мөһим проект, Башҡортостан генетиктары ла уға ҡушылды. Һөҙөмтәлә Рәсәй халыҡтарының, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, референс (өлгө) геномдары билдәләнәсәк. Бик киң күләмдә асыҡланған геномдар нигеҙендә ҡайһы этноста ниндәй генетик мутациялар булыуы хаҡында мәғлүмәт тупланасаҡ. Ә был киләсәктә шул уҡ генетик медицина өлкәһендә яңы технологиялар булдырыу мөмкинлеген бирә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Эльза Камил ҡыҙы хәҙерге заман генетикаһының төрлө проблемалары хаҡында ҡыҙыҡлы һәм ентекле мәғлүмәттәр менән таныштырҙы. Генетика фәне һәм ғәмәлиәте киләсәктә кеше феноменының биологик асылы буйынса яңы асыштар яһар, һәр кешегә һәм йәмғиәткә файҙалы ҡаҙаныштарға өлгәшер тигән өмөттә ҡалайыҡ. Тағы бер теләк: гәзит уҡыусыларыбыҙ араһында ошо ябай булмаған, аң көсөргәнешлеге һәм белем талап иткән әңгәмәне иғтибарлап уҡып, үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашыусы булырмы икән? Көтөп ҡалабыҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ғәҙәтемә ярашлы оятһыҙлыҡтан оялам, хаяһыҙлыҡтан тетрәнәм гелән. Әле лә ни тере, ни үле түгел шаңҡығандай урынымда бер аҙ һерәйгәс, боролдом да аяҡтарымды көскә һөйрәп ҡайтыу яғына ҡарай атланым.***




Күршебеҙҙә генә, түңгә ҡарай өҫкө яҡтан Нурислам ағайҙың берҙәм, егәрле, татыу ғаиләһе йәшәй. Ул үҙе совхоз бүлексәһенең механигы, ә алыҫ тарафтарҙан килен булып төшкән ҡатыны Татьяна апай участка дауаханаһында етәксе. Өс балалары бар: Лена, Лида, Валера. Улар барыһы ла бында тыуғанлыҡтан, рус теленең ни икәнен дә белмәйҙәр. Таня апай ҙа бер ниндәй ыҡ-мыҡһыҙ беҙҙеңсә һөйләшә, һәр кем менән һәүетемсә, иркен аралаша, ҡунаҡтарҙа иһә, ҡайһы саҡ, дәрте килгәндә, ҡыҫҡа таҡмаҡтарға тартым йырҙарҙы йырлап та ебәргеләй, тик ни хәл итәһең, килешһеҙерәк һикрәңләп, тыпырҙап бейеүе ят, өҫтәүенә почтанан урыҫ телендә сыҡҡан гәзит-журналдарҙы ғына яҙҙырта, сиркәү байрамдарының береһен дә ҡоро ҡалдырмай, теүәлләп, урын-еренә еткереп үткәрә.

Миңә, мәҫәлән, уларҙың йомортҡа байрамдары ныҡ оҡшай, ни өсөн икәнлеге һүҙһеҙ ҙә аңлашыла - ул көндө эсең һыртыңа сыҡҡансы, ғарҡ булғансы төрлө төҫтәргә буялған тауыҡ йомортҡалары менән тығынырға мөмкин, күршебеҙҙән ылғый ауыҙға инеп бармаған башҡа тәмлекәстәр ҙә эләккеләй. Асыҡ йөҙлө, ҡайҙа ла балыуан ҡуллы, йомарт күңелле булғаны өсөн иғтирам иткән Таня апайыбыҙҙың һөйләшеүе башҡорт булһа ла сеп-сей һарынан бөткән тышҡы ҡиәфәте урыҫ, эсе урыҫ, ошо урында өҫтәп әйтеп китергә кәрәк, урыҫ булғас тәкәббер ҡырыҫлығы ла бар, шулай ҡәтғи, киренән бөткән үҙһүҙле булмаһа өс балаһына ла исемде үҙе ҡушмаҫ ине, моғайын. Ә бына беҙҙә һәр баланың ҡолағына ғүмерлек йөрөтөр исемен ҡысҡырып изге йоланы Әбдрәхим мулла атҡара, муйыныма ҡот билдәһе итеп ул өшкөргән-төкөргән бетеүҙе лә таҡҡанмын, әммә ырыҫым самалы, ҡотом, даланым ҡайтыш шул минең, ярай ул хаҡта аҙаҡтанырaҡ һөйләрмен, һөйләмәгән хәлдә лә көн итмешемә ҡарап һүҙһеҙ ҙә төшөнөрһөгөҙ.

Лена ике йәшкә олораҡ, Валера иһә яңы өс йәшен тултырһа ла буйсан бала, ә Лида инде тиҫтерем, мәктәптә лә иң алғы партала йәнәш ултырабыҙ, ул зирәк, отҡор, уҡыу алдынғыһы, мин шул, тел тигәндә телеп һалһам да хисаплауға иренсәгерәкмен, оңҡотораҡмын, әммә башҡа, теүәллекте талап итмәгән донъяуи фәндәргә һере булғанға уртансынан саҡ ҡына юғарыраҡтар рәтендә иҫәпләнәм. Парталашым әсәһенә оҡшап һаран түгел, арифметиканан ҡушыу-алыуҙар, ҡабатлау-бүлеүҙәр уҡмашҡан өйгә эштәрҙе тартынуыһыҙ күсерергә бирә, башҡа урындарҙа ла айырылмаҫ юлдашбыҙ, шуға гел бергә уйнайбыҙ, бергә ашайбыҙ, бергә төнәйбеҙ, ҡайҙа ла бергәбеҙ.

Таня апай һөнәре буйынса фельдшер, эше буйынса етәксе булараҡ юлдан ҡайтып инә белмәй, йә район үҙәгенә сығып китә, йә күрше-тирә ауылдарға, төҫкә-башҡа урта сибәр Нурислам ағай ҙа ҡулсыр, юлсыр, мосафир кеше, көнө ҡоро түгел, сылбырлы, тәгәрмәсле тракторҙарға, тағылмалы сәскес-урғыстарға, бүлексәнең берҙән-бер комбайнына, йөк машинаһына беҙҙән ҡырҡ саҡрым йыраҡта ятҡан совхоз үҙәгенән запчастар ташый, шуға күрә Лена, Лида, Валера гелән беҙҙә туҡланалар, беҙҙә йоҡлайҙар, ғөмүмән үҙ өйҙәреләй күреп беҙҙә йәшәйҙәр. Нурислам ағайҙы ҡулсыр, тиеүем шунан килә, бик йыш ҡыҙмасаланып һуҡмыш йөрөргә ярата, һуҡмыштың көнитмеше билдәле - уның өсөн көн дә байрам, көн дә туй. Кис етһә, йоҡларға ишек ауыҙындағы мейескә терәлеп тиерлек башланған оҙон һәндерәгә тартым урындыҡта теҙелешеп ятабыҙ, әсәйемдең һул ҡуйынында Мәҙинә апайым мышнай, уң яҡта мин кәкрәйгәнмен, ә миңә инде үҙ сиратында Лида һыйынған, Лиданан арыраҡ Лена, тулап, асынып йоҡлағанлыҡтан Валера йортобоҙҙоң берҙән-бер ҡаралтыһы - оло арбалай йомшаҡ диванда маҙырай. Таңға саҡлы, йоҡо аралаш, Лидаңың тын алышын тойоп ятам, ул һәр саҡ минең ҡурсалауымда: башым аҫтындағы ҡолаҡсын ҙурлыҡ ҡаҙ яҫтығын йәтешләп уның яғына ҡарай этәренкерәйем, шылған юрғанын төҙәтеп ябам, ишек яғынан бәргән һалҡындан һаҡлап ян-яғын тыҡшырып ҡымтыштырам. Ул шундайыраҡ ҡапаҡлауҙарға, ҡымтыуҙарға өйрәнгән, күнгән, саҡ ҡына вайымһыҙлыҡ, иғтибарһыҙлыҡ күрһәтһәм, ҡылтайырға әҙер. Әсәйем аҙнаһына бер тапҡыр, йоманан һуң дауахана эргәһендәге ауырыуҙар өсөн тәғәйенләнгән дөйөм мунсаны яға.

Әйтеп үткәнемсә, йома көн беҙ күмәгебеҙ йыуынып алабыҙ, шәмбе көн дауаханала дауаланған ирҙәр, йәкшәмбе көн - ҡатындар. Мунса санитаркаларҙың даими күҙәтеүе аҫтында, иҙәне, эләүкәһе һәр саҡ ҡырып йыуыла, эшкәртелә, таҙартыла. Етеп килгән ҡыҙҙар булараҡ иң башта Мәҙинә апайым менән Лена айырым инәләр, шунан инде - ҡалғандарыбыҙ. Әсәйем беҙҙе оло кәритәгә ҡапма-ҡаршы ултыртып ҡуйып мине кер, Лиданы еҫле һабын менән ентекләп ышҡып йыуындыра, эләүкәгә йәнәш һалып-ҡуйып, әйләндереп-тулғандырып ҡайын миндеге менән сабындыра, ары Валераға сират. Таҙарынғандан һуң кәрәсин еҫен борхотҡан ялпылдаҡ шәм яҡтыһында, томрала ығышып кейенеүгә лә апаруҡ ваҡыт китә. Мунсанан өсәүләшеп ҡайтабыҙ: мамыҡ юрғанға төрөлгән Валераны ауырлыҡ менән сосаландырып күтәреп алдан атлайым, Лида инде айырылғыһыҙ кимәлдә миңә тағыла. Оҙон буйлы Валераның аяҡтары юрғандан сығып күренә, йәйгеһен артыҡлап өндәшмәһә лә ҡыш көндәре өйгә ҡайтып ингәнсе: "Аяҡтарымды өшөтәһең!" тип мыжый, мин инде: "Ир кешеһең бит, сыҙа, бирешмә!" тип тыям тегене. "Ир буғансы сыҙатмаҫһың, үлтерерһең инде!" "Үлмәҫһең! Тағы ла тауышың ғына сыҡһын, хәҙер шыр яланғас килеш тырпыратып ҡар өҫтөнә ырғытып китәм!" Ырғытыу ҡайҙа, янайым, ҡурҡытам инде шунда, ни тиһәң дә бер туған ҡәйнеш бит. Таня апай ҙа миңә исемем менән өндәшмәй, ҡайҙа ла ололап, ҙурлап кейәү, ти ҙә ҡуя, Лида ла ҡаршы килмәгәс, был дәрәжәне артыҡлап теләмәһәм дә күндәм ҡабул итәм. Еҙнәй булыуы яуаплы ғына түгел, мәшәҡәтле лә, сығымлы ла йөкләмә, ҡәйнешемде "еҙнәй аҡсаһы" урынына үҙемә эләккән тәм-томдо ҡап-урталай бүлеп һыйларға тура килә.

Өсөнсө класҡа күскәс хәл ҡырҡа үҙгәрҙе, дәрәсәрәге үҙем үҙгәрттем, бер көн ҡулымды ҡылыстай һелтәп кире ҡаҡҡыһыҙ талабымды ҡуйҙым: "Хәҙер ҙурайылды инде, класс сәғәтендә бер тауыштан староста итеп һайлап та ҡуйҙылар, шулай булғас башҡаса Лида менән мунса төшмәйем, бер кәритәгә утырып йыуынмайым, бер түшәккә ятып йоҡламайым, етте!" "Балам мин дә бит эш кешеһе, ҡайһылайтып һәр берегеҙҙе теүәлләп айырым йыуындырайым, ти, элеккесә булмаһын, тиһәң мунсала саҡта күҙҙәреңде йом да, сатыңды ике ҡуллап уҫлап тик кенә ултыр, шулай дөрөҫөрәк булыр!" "Ошоғаса күп йомолдо йоммайым да усламайым да!" "Киреләнмә, тиҫкәреләнмә!" "Әйттем-бөттө, талаҡ!" "Әйткәнеңдең мәғәнәһен беләһеңме һуң?" "Белмәгән ҡайҙа, беләм, теңкәләрен ҡоротҡан бисәләренән ялҡыған ирҙәр шулай ти!" Һүҙемде һүҙ иттем тәки, хәҙер Мәҙинә менән Ленанан һуң бер үҙем инәм йыуынырға, тик мунсалағыларҙы ташлап ҡайтыу ҡайҙа, сығам да солан ултырғысына суҡайып һағып көтәм, шунан баяғылай эйәртенешеп, күтәренешеп ҡайтыу яғына табан атлайбыҙ. Түшәк мәсьәләһенә лә үҙгәреш кереттем, Валераны әсәйемдең янына күсереп диванда бер үҙем йәйрәйем. Үҙаллылыҡҡа күскәс бер аҙ яйһыҙыраҡ, иллә рәхәт, хөрриәт, тик бер яҡшының бер михнәте, тигәндәй яурынымда таныш, йылымыс тын алыуҙы, муйынымдан һығып ҡосаҡлаған йомшаҡ ҡулды тойоп ятмағас бер аҙ ҡыйыныраҡ та, яманһыуыраҡ та. Лида айырылышыуыбыҙҙы ғәҙәтенсә ҡылтайып ҡабул итһә лә барыбер тулыһы менән ситләшмәне, ҡайҙа ла тәндәребеҙ береккәндәй етәкләп атлай, бергә уйнайбыҙ, бер сеүәтәнән ашайбыҙ. Уйын мәлендә лә уны күҙ уңында тотоп, байҡап, ҡарап ҡына йөрөтәм, ғауға ойошторған һуғышсан малайҙарға йәбергә бирмәйем.

Бына әле лә ауыл тирәһендәге тау битләүҙәре, түндәр тулыһы менән ҡарҙан әрселеп, һурығып бөтмәгәнлектән урта тош урамда йәшәгән Мәүләмбирҙе ағайҙарҙың кәртәһеҙ ишек алдында шау-гөр килеп уйнап йөрөйбөҙ, ситботта ҡалған иреү ҡар өйөмдәренән Ҡыш Бабай әүәләп аҙапланабыҙ. Ҡыш Бабайыбыҙ ҙа оҙаҡҡа сыҙамаҫ шай, яҙ ҡояшының ҡыҙыу нурҙары аҫтында моғайын да тиҙ арала бәлшәйеп төшөр, бер яҡҡа аушайыр. Шуға кәрәкһеҙ шөғөл менән мауығырға теләмәй бер яҡ ситкә, бағана башына кәнсир урынлаштырғанмын да ҡар йомарлап шул сәпкә ырғытам. Ошолайтып уйнаһаң күңеллерәк тә, мәғәнәлерәк тә. Бына бит, аяҡ аҫтында ятҡан бәлә, сәпкә оҙатҡан сираттағы йәҙрәм бағанаға барып тейҙе лә бер ярсығы шул тирәлә быстырҙаған Нәйләнең күҙ соҡорона барып та һылашты.

- Ә-ә-әл-л-леү! - Сәрелдәк тауыш ҡолаҡты ярҙы.

- Яҙа китте бит, яңылыш эләкте, йә, илама! - Тегенең янына барып һалҡын ҡулдарым менән бит-йөҙөн, ҡыҙарып остайған тымаулы танауын һыпырыштырҙым, шәленән туҙырап сыҡҡан сәстәрен төҙәтештерҙем. Уйындың көтөлмәгән йүнәлеш алыуын күргән тиҫтерҙәрем бер яҡ ситкә өйкөлөштө.

Нәйләнең тынысланырға йыйы ла юҡ, әпәүләүемде абайлағас тағы ла ярһыбыраҡ илай башланы:

- Күҙемде һытҡаныңды атайыма әйтеп т-у-ҡ-м-а-ата-а-амм!

- Тыныслан, донъя ҡыйралмаған, күршегеҙҙәге Һуҡыр Хәйбулла бер ҙә бирешмәй, төртәләнеп, имән таяғы менән барыр юлын ҡыуалатып йөрөп ятҡан көнө, бер күҙ менән дә йәшәп була ла баһа!

Ысынлап та күҙһеҙ ҡалдым, шикелле, тип шик-шөбһәгә төшкән Нәйлә урам буйын яңғыратып аҡыра ғына.

Шул тауышланыуҙы ғына көткәндәй транса соландың бейек тупһаһында Һайыҫҡан Хәлимәнең йыуан, төпөш кәүҙәһе пәйҙә булды һәм ул ҡыҙынан былайыраҡ итеп сарғаланырға тотондо:

- Тағы ла шул хәстрүш Айҙармы?!

- Шу инде, ш-у-у-у...

- Бар, кит ҡыҙымдың эргәһенән! - Ахылдап- ухылдап ауырлыҡ менән тупһанан төшөп һимеҙ өйрәктәй байпаңлап килеп, елкәмдән эләктергән Хәлимә мине бер яҡ ситкә елтерәтте лә йомран күҙҙәре менән йызылдап ҡарап ҡыҙына тексәйҙе. - У һине ни эштәтте, ҡороғор, ҡәһәр һуҡҡыр, йә, хәҙер үк жибы ғына итеп әйт, штубы!

- Күҙҙәренә тотошлайы менән аҡ һалған Хәйбулла олатай ише тома һуҡыр ҡалдырҙым, тип үсекл-ә-ә-ә-й...

- Ҡана, ҡарайым әле! - Хәлимә ҡыҙының ҡыҙарған күҙҙәрен усының һырты менән һыпырҙы. - Күҙең былай урынында, һытылмаған, ҡойолмаған алай ҙа, ярай, сеү, тыныслан берүк!

- Элекке көн, кисә мәктәптә саҡта йолҡоп ырғытмаҡсы булып толомдарымдан тартҡайны, бөгөн күр, ҡайһылайтты, ул гел генә миңә ш-у-улай-т-та-а-а! - Яҡлаусыһы булғас Нәйлә тағы ла ярһыбыраҡ иларға кереште.

- Ана бит ана, ҡыҙғынамды, алтындай бер бөртөк бәпесемде, харап иткән йүнһеҙ зимагур!

- Мин юрый түгел дә инде, көтмәгәндә килеп сыҡты! - Аҡланырға итәм.

- Шымып тик кенә тор, уйнаш балаһы, һинән кем һорай?! - Хәлимә ҡыҙының танауының төбөндә һуҡ бармағын уйнатты. - Күпме әйтергә, тумбытырға була һине, шул атаһыҙ етемәк менән уйнама, тип! - Ҡара ҡомғандай йылтыр, быжыр йөҙ тағы ла төмһәреберәк китте.

- Саҡырманым да инде, әрһеҙләшеп, мынау мәрйә ҡыҙын эйәртеп үҙе килде, гел шулайтып килә лә бәйләнә, килә лә бәйләнә.

- Килһә ни, буҡлы сыбыҡ менән бүлтерәк бәрәстәй итеп ҡыуығыҙ ҙа ҡайтарығыҙ үҙен. Ул бит бисәнән бисәгә йөрөгән атаһына оҡшап тәртипһеҙҙең тәртипһеҙе, бәйелһеҙҙең бәйелһеҙе, йәй булһа йәшелсә баҡсаһын утай, ҡыш етһә һинең уйынсыҡтарыңды урлай, тоҡомһоҙ, атайһыҙ, уйнаштан яралған бетле ҡараҡ!

Боҙло Һаҡмар һыуына ҡойондорҙолармы ни, ишеткән ғәйепләүҙәрҙән баҙап, тапма тотҡандай телһеҙ ҡалдым. Ғәҙәтемә ярашлы оятһыҙлыҡтан оялам, хаяһыҙлыҡтан тетрәнәм гелән. Әле лә ни тере, ни үле түгел шаңҡығандай урынымда бер аҙ һерәйгәс, боролдом да аяҡтарымды көскә һөйрәп ҡайтыу яғына ҡарай атланым. Бәддоға уҡығандай итеп ҡарғау, янау әллә күпме ара артымдан ҡара ҡойондай оҙата барҙы. Башҡа бинахаҡ әрләүҙәр ҡойоло бысраҡтай өҫтөмә һылашһалар ҙа әйтелгән бер һүҙ генә йөрәгемә уҡтай килеп ҡаҙалды: "Атайһыҙ... атайһыҙ... атайһыҙ..." Атайлы балалар ни тиһәң дә бәхетлеләр шул, сөнки уларҙың яҡшымы-яманмы, эшсәнме-ялҡаумы, бәһлеүәнме-сибекме, оҙонмо-тәбәнәкме аталары бар, аталары!

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# УҢАЙЛЫЛЫҠ ТА ЗЫЯНҒА

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда, компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа әгәр ҙә кеше үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштырыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында ацесульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, циклoмат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зыянлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Диетологтар лимонды организмды таҙартыусы иң яҡшы сара тип һанай. Ул организмдан шлактарҙы ҡыуа, махсус диета тотҡанда һәм физик күнекмәләр яһағанда был цитрусы үҫемлек артыҡ ауырлыҡтан ҡотолорға ярҙам итә. Бынан тыш, лимонда иммун системаһын ныҡытыусы, аллергия, туберкулез, ревматизм мәлендә хәлде яҡшыртыусы С витамины күп. Диетологтар лимондың ҡабығын да ашарға тәҡдим итә, сөнки уның составындағы пектин асығыу тойғоһон бер нисә сәғәткә баҫа.

■ Баҫҡыс бер ҡаттан икенсеһенә әләгеү мөмкинлеге биреүсе сара ғына түгел, ә тренажер ҙа икәнлеге күптән билдәле. Әммә уның файҙаһы булһын өсөн баҫҡыстан дөрөҫ күтәрелергә кәрәк, ти Роухемптон университеты ғалимдары. Белгестәр әйтеүенсә, бер юлы бер нисә баҫҡысты аша атларға ярамай, был саҡта калориялар әүҙемерәк янһа ла, ваҡ аҙымдар менән атлау улар менән яҡшыраҡ көрәшә. Ғалимдар иҫәпләүенсә, аҙнаһына биш тапҡыр 5 баҫҡыс аралығы үтеп, кеше 302 калориянан ҡотола ала.

■ Калифорния һәм Мадрид университеттары нейробиологтары ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең баш мейеһен, аныҡлап әйткәндә, хис-тойғолар һәм хәтер өсөн яуап биргән гиппокамп өлөшөн тикшергән. Һөҙөмтәлә ҡатын-ҡыҙ баш мейеһе формаһы буйынса ирҙәрҙекенә ҡарағанда бәләкәйерәк булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙар уны әүҙемерәк ҡуллана. "ИноСМИ" баҫмаһы яҙыуынса, гиппокамп ҙурыраҡ булғанға күрә, ирҙәрҙең баш мейеһендә нейрондар күберәк була, был уҙ сиратында юғары аҡыл ҡеүәһенә килтерә. Әммә гүзәл заттарҙың мейеһе әүҙемерәк эшләй, шуға ла улар аҡыл йәһәтенән көслө заттан бер ҙә артта ҡалмай, ти ғалимдар.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЯҘМЫШЫБЫҘҒА ШӨКӨР ИТӘЙЕК!



**Гәзитебеҙҙе алғас та уның иң арткы битендәге "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын уҡый һалып алам. "Шулай итеп…" тип башланған өлөшөндә йыш ҡына тормошобоҙҙоң һәр төрлө үҙенсәлектәре хаҡында фекерләүгә этәреүсән кескәй генә хикәйәттәр сыҡҡылай.**

Әле 38-се һандағы бер риүәйәт минең үткәнемде бер аҙ хәтерләтте. Һөнәре буйынса юғары уңышҡа ирешкән хирургтың үҙенең ҡаҙаныштары менән һис кенә лә ҡәнәғәт булмауы, сөнки уның бала сағынан бейеүсе булырға хыялланғанлығы хаҡында был кинәйә. Шул төп геройҙың бөгөнгө көндә "иң яҡшы хирург" булып танылып та, әммә "иң насар бейеүсе" булыуына риза түгеллеге тураһындағы ошо хикәйәтте уҡығас, һис кисекмәҫтән, үҙемдең фекерем менән дә бүлешмәксемен. Мәҡәләнә хатта бәғзе Нобель премияһы лауреаттарының да үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт булмауы, шуға күрә йәмғиәт маҡсаттарына, тормош ихтыяжына артыҡ буйһонмай, "аңлыҙ тойолған тәбиғәтенә" эйәрергә тырышыу зарурлығы хаҡында фекер йөрөтөлә.

Минең ныҡлы инаныуымса, тәбиғәткә эйәрәһеңме, әллә тормош ихтыяжы буйынса йәшәп китәһеңме, былар барыһы ла - Аллаһы Тәғәлә яҙған тәҡдир буйынса бара бит инде... Мин дә бала сағымдан музыка менән мауығып, ҡасандыр үҙем музыкант булырға хыялланған инем. Икенсенән, хәрби кеше булғым да килә ине. Хәрби училищеға барырға теләгемде әйткәс, әсәйем илап ебәрҙе: "Ғайса ағайың егерме биш йыллыҡ хеҙмәттә, инде нисәмә йыл үәйәннейҙә йөрөй. Уның ҡайтҡанын көтөп ала алырмын бәлки, әммә һин унда китһәң, уға тиклем йәшәй алмаҫмын тип ҡурҡам (ғаиләлә иң оло булған Ғайса ағайым менән минең йәш айырмаһы - 15 йыл)".

Әсәйем сеңләп илап ебәргәс, уны йәлләп, үҙем ниәтләп йөрөгән танк училищеһына бармаҫҡа булдым. Уҡырға инеү шарттарын һорашып, Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә хат яҙҙым. Оҙаҡламай, тап ана шул йыл ҡурай бүлегенә ҡабул итеүҙәр булмағанлығы хаҡында Ғата Сәләймәновтың ҡултамғаһы ҡуйылған хат килеп төштө. Аптырағас, Өфө нефть институтына барырға булдым, әммә унда конкурстан үтә алманым, бер йылға яҡын совхозда эшләнем.

Йәй башында кесе ағайым Юлай әрмәнән ҡайтып төштө лә, минән: "Ҡайҙа уҡырға барырға йыйынаһың?" - тип һораны. Мин әлеге сәнғәт хаҡында һүҙ сығара башлағас: "Әйҙә киттек, медҡа. Атай-әсәйҙәр ҙә ҡартайып бара. Уларҙы ҡарар кеше лә кәрәк булыр, лутсы табип булайыҡ..." - тип тәҡдим итте. Уның менән ризалаштым. Икебеҙ ҙә Башҡорт дәүләт медицина институтына уҡырға инеп киттек. Ә инде институтты тамамларға ике йыл ҡалғас, мин әсәйемә хәрбилек хаҡында тағы һаҡ ҡына мөрәжәғәт иттем. Был юлы ул фатихаһын бирҙе. Хеҙмәтем, әлхәмдүлиллаһ, баштан аҙағына ҡәҙәр уңышлы булды. Ваҡытында (хатта бер көнгә лә һуңлатмайынса) хәрби званиеларҙы ла биреп барҙылар. Әлеге мәҡәләләге хирург һымаҡ уҡ, артыҡ бөйөк үрҙәргә ирешмәһәм дә, мин етәкләгән отоларингология бүлеге Стратегик ракета ғәскәрҙәре ҡуләмендәге госпиталдәр араһында алдынғылар рәтендә булды, әлхәмдүлиллаһ. Хаҡлы ялға сыҡтым, йәшәргә Тыуған илгә ҡайттым...

Ә "иң яҡшы бейеүсе" була алмаған әлеге мәҡәләләге хирург үҙенең балалыҡ хыялы тормошҡа ашмауына ҡайғырған бит инде. Мин, киреһенсә, ҡурайсы булып китә алмауыма тик һөйөнәм генә. Ни өсөн? Сөнки, үҙемдең тәҡдиремә яҙылған сирем сәбәпле, инде егерме йылдан ашыу элек көй ишетеү һәләтемдән яҙҙым. Көйҙә ишетмәгәс, уны сығарып та булмай икән ул. Ҡасандыр йырлаған йырҙар, ҡурайҙа уйнаған көйҙәремде бөгөнгө көндә йырлай ҙа, уйнай ҙа алмаҫлыҡ хәлдәмен. Был - яҙмыш. Башҡаса бер нисек тә булыу мөмкин түгел ине... Күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Әйтәйек, мин әлеге сәнғәт училищеһына инеп, оҫта ғына ҡурайсы булып киттем икән ти... Әммә, ҡырк-ҡырк биш йәштәр тулмаҫ борон уҡ, "үҙемде аҫрап торған" ана шул һөнәрем буйынса бөтөнләйгә "эшлектән сыҡҡан" булыр инем бит. Ә бөгөнгө көндә иһә, отставкалағы хәрби булараҡ, һәүетемсә, "түңәрәк" кенә пенсиям бар, хөкүмәт беҙгә тейешенсә льготалар ҙа биргән. Бына шуға күрә, заманында музыкант булып китә алмауым өсөн Аллаһы Тәғәләгә ныҡ шөкөр ҡылам. Бейеүсе булып китә алмаған әлеге хирург юҡҡа ғына үкенә, тип уйлайым. Береңенән, уның оҫта, мәшһүр бейеүсе булып китә алыр-алмаҫы ла билдәһеҙ. Ана шунын өсөн дә Аллаһы Тәғәлә яҙған яҙмышҡа һәр саҡ риза булып ҡына йәшәргә ҡушҡан Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әҙәм балаһы күпселек осраҡта үҙенең ҡаҙаныштарына риза була белмәй. Әлеге хирург та тап ана шундайҙарҙан.

Икенсенән, әсәйемдең мине танк училищеһына ебәрмәүе өсөн дә Аллаһы Тәғәләгә көн-төн шөкөр итәм. Сөнки мин лейтенант булып сығыр йылды (1979 йыл) Афған һуғышы башланды. Тап әлеге үҙем барырға ниәтләп йөрөгән Ташкент ҡалаһындағы хәрби танк училищеһын тамамлаған йәш лейтенанттарҙың күпселеге шул "ҡыҙыу нөктә"гә ебәрелгән икән. Бик күптәре һәләк тә булып ҡалған. Әсәйемдең изге доғаларын Аллаһы Тәғәлә ҡабул итеп, бына шундай бәлә-ҡазаларҙан аралап алып ҡалғандыр, тип тә уйлайым. Ә мин хеҙмәт иткән Стратегик ракета ғәскәрҙәренән ("секретный" частар булғанға күрә) Афғанға алманылар. Әлхәмдүлиллаһ, тием бөгөнгө көн бына ошо яҙмышым өсөн.

Ошоға оҡшашыраҡ тағы бер бәләкәй генә миҫал. Ғаиләбеҙҙәге иң төпсөк Йәлил ҡустыбыҙ ҙа баян мәктәбен тамамлағайны. Әммә бәләкәстән музыканы ғәйәт ныҡ яратыуына, шундай һәләте булыуына ҡарамаҫтан, унынсы синыфтан һуң "Мин ғаиләлә кинйә ул булараҡ, атай-әсәйемде ҡарап, ауылда йәшәргә бурыслымын. Шуға күрә Ауыл хужалыҡ институтына барам", тиғән ҡәтғи ҡарарға килде ул. Ун ете йәшлек туғаныбыҙҙың ана шулай төптән, етди фекерләп беҙгә иғлан итеүе барыбыҙҙы ла ғәжәпләндергәне (хатта таң ҡалдырғаны!) хәтеремдә. Ғәйәт тырыш ҡустыбыҙ институтты, аспирантураны ҡыҙыл дипломға тамамланы. Бөгөнгө көндә ул биология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Фәндәр Академияһы академигы, Рәсәй Тәбиғи Фәндәр Академияһы академигы. Шул уҡ ваҡытта музыканы ла ташламаны. Ул ғына ла түгел, бәғзе шағирҙарҙың (Аҫылғужа, Фирүзә Абдуллина, Миләүшә Ҡыҙрасова, Сәкинә Тотманова һ.б.) ижадына көй яҙа, ул йырҙарҙы Рәмил Туйсин, Рәүил Харрасов, Алһыу һәм Зилә Бәхтиева һымаҡ билдәле йырсылар ҙур сәхнәләрҙә лә йырлай, халыҡ яратып ҡабул итә.

Балалары өсөн иман, иҫәнлек, бәхет, уңышлыҡ һорап, һәр намаҙ һайын Аллаһы Тәғәләгә ялбарыр булды изге йөрәкле әсәйебеҙ. Атайыбыҙ яҡты донъянан киткәс, уны башта Юлай ағайым менән Йондоҙ еңгәм, унан, һуңғы көндәренә тиклем Йәлил ҡустым менән Мөнирә килен ҡәҙерләп ҡараны. Бына шуның өсөн уларға барыбыҙ ҙа рәхмәтлебеҙ, Аллаһы Тәғәлә яҙған ошо яҙмышыбыҙға ла ризабыҙ.

Мәҡәлә һуңында. Эйе, тормош тиғән нәмә ифрат та ҡатмарлы. Кем ниндәй юл менән китерен һәм уның менән ни булырын Аллаһы Тәғәләнән башҡа бер кем дә белмәй. Ваҡыт үтеү менән артыңа әйләнеп ҡарайһың да, бына шундайыраҡ юҡыҡта фекер йөрөтә башлайһың. Мәктәптә уҡыған саҡта бәғзеләрҙең "круглый отличник" булып йөрөп тә, тормошҡа яраҡһыҙ булып сығыу миҫалына һәм, шул уҡ ваҡытта, уҡыуҙа "көскә һөйрәлеп йөрөгән" икенселәрҙең бөгөнгө көндә бынамын тиғән итеп тормош көтөп тороуына ҡарап, һис кем өсөн алдан берәй нәмә фаразлау ярамайҙыр, тип уйлайым. Нисек кенә фаразлаһаң да, уның бөтөнләйгә дөрөҫкә сыҡмау ихтималлығы ҙур...

Әлбиттә, был тема буйынса башҡа фекерҙәр булыуына ла шикләнмәйем. Әйҙәгеҙ, барыбыҙ ҙа яратҡан "Киске Өфө"бөҙ аша иркенләп фекерләшәйек, ҡәҙерле гәзит уҡыусылар!

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны.**

✓ *Әүҙем йәшәү рәүеше алып бармаған кеше бәхетле лә, сәләмәт тә була алмай, сөнки физик күнекмәләр кешенең тәбиғи бер ихтыяжы булып тора һәм шатлыҡ, ҡыуаныстар бүләк итеп, уның күңеленә, рухына яҡшы тәьҫир итә.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Динебеҙҙең төп сығанаҡтары - Ҡөрьәндә һәм бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөннәтендә кешенең физик сәләмәтлеген һаҡлау өсөн күп кенә күрһәтмәләр бирелгән. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең өммәтен ғибәҙәт ҡылырға ғына түгел, шулай уҡ кешенең тормошон еңеләйтергә, тән, рух һәм әйләнә-тирә менән гармония тыуҙырған йәшәү рәүешенә өйрәтә. Аллаһы Тәғәлә үҙенең ҡолдарына рух, аҡыл һәм кәүҙә сәләмәтлеген тәьмин иткән бөтә нәмәне рөхсәт итә һәм тойғоларҙы, һәләтте тараткан, уның рухи һәм физик сәләмәтлегенә зыян итерҙәй эштәрҙе тыя.**

# ҒИБӘҘӘТ ҠЫЛЫРҒА ЛА...

## үҙ-үҙеңде дауаларға ла өйрәтә Бәйғәмбәребеҙ



### Әүҙем булһаң - ауырымаҫһың

Организмдың әүҙем эшмәкәрлеге өсөн дөрөҫ туҡланыу мөһим. Ләкин кеше аҙ хәрәкәтләнеүсән йәшәү рәүеше алып барһа, аҙыҡ организм тарафынан тулыһынса һеңдерелеп бөтмәйәсәк. Һөҙөмтәлә был һимереүгә, үт һыуының, бәүел юлының, ҡан тамырының тығылыуына, быуындарға тоҙ ултырыуына килтереүе ихтимал. Хеҙмәт эшмәкәрлеге һәм физик күнекмәләр был хәлдәрҙән иң яҡшы һаҡланыу сысулы булып тора. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Аллаһым, мин ялҡаулыҡтан һәм ҡартлыҡ хәлһеҙлегенән һиңә һыйынам", - тип доға әйткән.

Ер йөҙөндә үҙенең тормош юлын үтер һәм Аллаһы Тәғәлә тарафынан иңебеҙгә һалынған вазифаларҙы лайыҡлы башҡарыр өсөн кешегә ныҡлы рух ҡына түгел, ә ныҡлы кәүҙә лә кәрәк. Кәүҙәһе сәләмәт булған кеше генә шәхси, ғаилә, йәмғиәт вазифаларын башҡаларға ҡарағанда күберәк башҡарырға әҙер.

Исламда үҙеңдең ғаиләңде аҫрау өсөн хәләл юл менән мал табыу Аллаһы Тәғәләгә яҡынайыуҙың, ғибәҙәттең бер төрө һанала. Ислам - ул хеҙмәткә саҡырыу. Бәйғәмбәребеҙҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер хәҙисендә: "Саҙаҡа һорауға ҡарағанда, бер ҡосаҡ утын бысып алып килеү яҡшыраҡ", - тиелә. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡулдары ауыр эштән ярылып бөткән бер сәхәбәне күреп: "Был ҡулдар тамуҡҡа эләкмәйәсәк", - тигән. Тик шуны истә тоторға кәрәк, эш ғибәҙәткә әйләнһен һәм Ҡиәмәт көнөндә үлсәү тәрилкәһендә ауырлыҡ булһын өсөн кешегә Аллаһы Тәғәлә тарафынан әмер ителгән бурыстарҙы (намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж) үтәргә һәм хәрәм менән бәйле хеҙмәттән һаҡ булырға кәрәк.

Физик ауырлыҡ ваҡытында тән йыйына, алмаштырыу процестары көсәйә һәм шлактар юйыла, тән таҙарына, көс йыя һәм яңынан аҙыҡ ҡабул итергә әҙер була. Быуындар һәм һеңерҙәр нығына, май массаһы мускулдыҡы менән алмашына. Умыртҡа һөйәге нығына, йөрәк-ҡан тамырҙары эшмәкәрлеге яҡшыра.

Атта һыбай йөрөү, һөңгө ырғытыу, көрәш, йүгереү ярыштары кеүек физик күнекмәләр Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәте буйынса иң яҡшы ғәмәлдәрҙән һанала. Бөтә төркөм мускулдары менән бәйле был спорт төрҙәре ауырыуҙарҙы иҫкәртеүҙең иң яҡшы сысулы булып тора.

Урман, ялан, тауҙарға сығып йөрөүҙәр, сәйәхәт шулай уҡ яҡшы эштәрҙән һанала. Кеше Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәре тураһында фекер йөрөтә, улар менән ҡәнәғәтләнә, ошоларҙың бөтәһе өсөн дә Раббыһына рәхмәт әйтә һәм бөтә ошо ваҡыт эсендә ғибәҙәт хәлендә була. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларҙың да, шулай уҡ ололарҙың да уйындарын хуплаған, үҙе лә уйындарҙа, ярыштарҙа, ат сабыштарында ҡатнашҡан. Ул уйындар кешенең тәбиғи ихтыяжы, тип һанаған. Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ял сәғәттәрен уйындар менән уҙғарырға саҡырған: "Күңел асығыҙ һәм уйнағыҙ. Миңә диндәштәремдең рухы төшөп йөрөүе оҡшамай", - тигән.

Халыҡта "хәрәкәттә - бәрәкәт", тиҙәр. Әүҙем йәшәү рәүеше алып бармаған кеше бәхетле лә, сәләмәт тә була алмай, сөнки физик күнекмәләр кешенең тәбиғи бер ихтыяжы булып тора һәм шатлыҡ, ҡыуаныстар бүләк итеп, уның күңеленә, рухына яҡшы тәьҫир итә.

### Бәрәкәт таратылған ваҡытта йоҡлама

Йоҡо - Аллаһы Тәғәләнең бөйөк бер ниғмәте. Яҡшы һәм дөрөҫ итеп йоҡламаған кешенең сәләмәтлеге боҙола, ул аҡыл һәм физик эшмәкәрлек ваҡытында юғалған көсөн яңынан туплай алмай. Ҡөрьәндә: "Истирәхәт ҡылыр (ял итер) өсөн төндө, яҡтылыҡ өсөн көндө Беҙ яралтҡанды күрмәнеләрме? Бында иман килтергәндәр өсөн, әлбиттә, ғибрәттәр бар", - тип әйтелә ("Ҡырмыҫҡалар", 86).

Ысынлап та, көн менән төн Аллаһы Тәғәләнең ике мөғжизәһе. Әгәр ҙә тулыһынса тик төн йәки көн генә булһа, беҙ нисек йәшәр инек икән, күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Аҡыллы кеше ошо ниғмәттәрҙе үҙенең сәләмәтлеген һаҡлау өсөн ҡулланырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төндөң беренсе яртыһында йоҡлаған, ә икенсе яртыһы башланыр алдынан уянған. Ул торған, тештәрен таҙартҡан, тәһәрәт алған һәм Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса намаҙ уҡыған. Шулай итеп, кәүҙә, ағзалар йоҡоноң да, ялдың да, күнекмәләрҙең дә үҙенә тейешле өлөшөн алған. Ошо ғәмәлдәрҙе үтәгән кешегә ҙур бүләктәр булыр. Был кәүҙә һәм рух өсөн хәҙерге донъя өсөн дә, теге донъя өсөн дә иң яҡшы хәл-торош.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Төндә үҙенә бер төрлө ҡыҫҡа ғына ваҡыт бар. Әгәр Аллаһ ҡоло шул мәлдә тотоп, доға ҡылһа, Аллаһ уға теләгәненең барыһын да бирер", - тигән.

Төндәрен ғибәҙәттә уҙғарған кешеләр Аллаһы Тәғәләнең иң яратҡан ҡолдарылыр. Был Бәйғәмбәребеҙҙең сөннәте. Уны тотҡан кеше әжерен алыр, әгәр ул быны эшләй алмаһа, бының өсөн язалаууҙар булмаясаҡ. Исламда кешене йоҡо баҫҡан ваҡытта өҫтәмә намаҙҙар уҡыу хупланмай. Мөмкинлегенә ҡарап ғибәҙәт ҡылырға һәм яйлап үҙеңде төнгө ғибәҙәткә өйрәтергә кәрәк.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенә кәрәккәндән артыҡ йоҡламаған, шулай уҡ кәрәк булһа, тулы йоҡонан да баш тартмаған. Йоҡлар алдынан ул Аллаһы Тәғәләгә доға әйткән.

Тыныс йоҡо шулай уҡ Аллаһы Тәғәләнән. Уның бойороҡтарын үтәмәгән, гонаһ ҡылған кеше тыныс ҡына йоҡлай алмай. Ер йөҙөндә нисәмә кеше йоҡоһоҙлоҡтан интегә! Улар төрлө ысулдар ҡулланып, үҙҙәренең организмын ағыулап бөтә.

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уң яҡ ҡабырғаһына ятып йоҡлаған, һул яҡҡа ятып йоҡларға кәңәш итмәгән һәм йөҙ түбән, эстә ятып йоҡлауҙы тыйған.

Көн һуңында, ҡояш байыр алдынан йоҡлау зарарлы, ә иртәнге йоҡо кешене ике донъя бәхетенән дә мәхрүм итә. Был ваҡыттағы йоҡо шулай уҡ организм өсөн зарарлы. Абдуллаһ бин Ғәббәс (ра) улдарының береһенең иртәнсәк йоҡлап ятыуын күреп, уға: "Тор. Бәрәкәт таратылған ваҡытта нисек йоҡлап ятаһың?" - тигән.

Яҡшы йоҡо организмдың һаҡлағыс көстәренең яҡшы эшенә булышлыҡ итә, психологик именлекте һаҡлай. Үкенескә күрә, бөгөнгө көндә күп кешеләрҙең Аллаһ тарафынан һалынған йоҡо һәм уяныу ритмы боҙолған, был невроз, психоз, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына сәбәпсе булып тора.

"Цивилизация" үҙенең көн тәртибен көсләп таға. Кешеләр һуң ята һәм һуң тора. Төн буйы телевизорҙың зәңгәр экрандары янып сыға. Әгәр тәҙрәгә ҡараһаң, ҡала төн буйы машиналарҙың күплегенән ҡайнап тора. Төнгө барҙарҙа күңел асыуҙар, дискотекалар таңға тиклем дауам итә. Төн әйләнәһенә алкоголле эсемлектәр һатыла. Бөтә енәйәттәр ҙә төндә ҡылына.

Ләкин кеше организмы йоҡоһоҙ тора алмай һәм кеше көндөҙ йоҡлай. Әгәр иртәнге намаҙ ваҡытында ҡараһаң, күп ҡатлы йорттарҙа бер генә лә тәҙрәлә лә яҡтылыҡ күрмәҫһең. Аллаһы Тәғәлә алдында үҙебеҙҙең битарафлығыбыҙ өсөн нисек яуап бирербеҙ? Төн бит ял итеү, ә көн изге ғәмәлдәр ҡылыр, ижад итер өсөн тәғәйенләнгән. Тик улар ғына беҙҙе Ҡиәмәт көнөндә ҡотҡарыр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Ун дүртенсе хат: "Кире һәм ыңғай йоғонто тураһында"

Һәр кешенең тормошонда йәшкә бәйле ҡыҙыҡлы күренеш бар: сит йоғонто. Был сит йоғонтолар, ғәҙәттә, егет йәки ҡыҙ балиғ йәшенә етеп барғанда - һынылышлы осорҙа, айырыуса көслө була. Һуңынан был йоғонтоларҙың көсө юғала. Әммә йоғонтолар, уларҙың "тайпылыштары", ә ҡайһы саҡта нормаль булыуҙары тураһында йәш кешеләр хәтерендә тоторға тейеш.

Бәлки, бында әллә ниндәй тайпылыш та юҡтыр: ни бары үҫеп килгән кеше, малай йә ҡыҙ, тиҙерәк өлкәнәйгеһе, үҙ аллы булғыһы ғына килә. Ләкин үҙ аллы була барғанда улар тәү сиратта ғаиләһенең йоғонтоһонан арынырға теләй. Уларҙың "балалыҡ" тураһындағы ҡуҙаллауҙары ғаиләләренә бәйләнгән. Был осраҡта өлөшләтә ғаилә үҙе лә ғәйепле була, сөнки уларҙың "балаһы" үҫеп етмәһә лә, өлкәнәйергә теләүен күрмәй. Әммә тыңлашыу ғәҙәте әле бөтмәгән, һәм бына ул үҙен өлкән тип таныған кешене "тыңлай", - ҡайһы саҡ хатта үҙе лә үҫеп, үҙ аллы булмаған кешене лә.

Йоғонтолар кире лә һәм ыңғай ҙа була. Был хаҡта онотмағыҙ. Әммә кире йоғонтоларҙан ҡурҡырға кәрәк. Сөнки ихтыярлы кеше кире йоғонтоға бирелмәй, ул үҙенә юлды үҙе һайлай. Ә ихтыяр көсө булмаған кеше насар йоғонтоларға бирелә. Аңһыҙ рәүештә йоғонтоға бирелеүҙән ҡурҡығыҙ: бигерәк тә яҡшы менән яманды аныҡ айыра белмәгән, иптәштәрегеҙҙән маҡтау һәм хуплау ишетеү оҡшаған (был маҡтауҙар ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, тик маҡтап тороуҙары мөһим булһа) осраҡта һаҡ булығыҙ.

### Ун бишенсе хат: "Көнсөллөк хаҡында"

Әгәр ҙур ауырлыҡтағы көрәшсе ауырлыҡ күтәреүҙә яңы донъя рекорды ҡуйһа, һеҙ уға көнләшеп ҡарайһығыҙмы? Әгәр гимнастка? Вышканан һыуға һикереүсе рекорд ҡуйһа?

Үҙегеҙ белгән бөтә нәмәне һәм нимәгә көнләшергә мөмкин булыуын һанап сыға башлағыҙ: үҙегеҙҙең эшкә, һөнәрегеҙгә, тормошоғоҙға яҡыныраҡ булған һайын, көнсөллөк тә эргәлә генә тороуын аңғарырһығыҙ. Был уйында кеүек - ныуыҡ, йылы, йылыраҡ, эҫе, яндым!

Һуңғыһында һеҙ күҙегеҙ ҡапланған көйө башҡа уйынсылар йәшергән әйберҙе таптығыҙ. Көнсөллөк тә бына шулай. Башҡа кешенең өлгәштәре һеҙҙең һөнәргә, ҡыҙыҡһыныуҙарға яҡыныраҡ булған һайын, көнсөллөктөң ҡайнар хәүефе арта төшә.

Был шул тиклем яман тойғо, унан тәү сиратта көнсөл кеше үҙе яфа сигә.

Хәҙер һеҙ ауыр көнсөллөк тойғоһонан нисек арынырға икәнде аңларһығыҙ: үҙегеҙҙең шәхси һәләтлектәрегеҙҙе, һеҙҙе уратып алған тормошта үҙегеҙҙең ҡабатланмаҫлыҡты үҫтерегеҙ, үҙегеҙ булып ҡалығыҙ һәм һеҙ бер ҡасан да көнләшмәйәсәкһегеҙ.

Көнсөллөк, тәү сиратта, һеҙ үҙегеҙҙе яҫһынған урында үҫешә.

Көнсөллөк һеҙ үҙегеҙҙе башҡаларҙан айырып ҡарамаған урында үҫешә.

Көнләшәһегеҙ икән, тимәк, үҙегеҙҙе тапмағанһығыҙ.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 21 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 12.00.
12.00, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Княжна милосердия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика.**
**14.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**14.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**21.15 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**22.00 Россия - спортивная держава. Итоги международного форума. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Д/ф "Инсан". [12+]**
**0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Однажды в санатории". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Княжна милосердия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Россия - спортивная держава. Итоги международного форума. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Уфимские умы. [12+]**
**17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Сочи" (Сочи КХЛ).**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**2.15 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**4.30 Телецентр. [12+]**

## 23 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Княжна милосердия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 24 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Д/ф Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.05, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Княжна милосердия". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар-2024. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Дознание. [16+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45, 4.15 Мегасело. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо" (Нижний Новгород). КХЛ.**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Лебёдушка моя". [12+]**

## 25 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Т/с Премьера. "Юг". [16+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.40 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.00 Х/ф "Воин". [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.15 Ҡурай даны. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**16.45, 19.45 История одного села. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**2.45 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә сәсән". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**

## 26 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Я тебя никогда не забуду...". К 80-летию со дня рождения Николая Караченцова". [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.10 "Наше всё". [12+]
14.00 Легендарный спектакль "Юнона" и "Авось". К 80-летию со дня рождения Николая Караченцова. [16+]
15.40 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап I. [0+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
19.50 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Х/ф Премьера. "Закрытый показ". "Чувства Анны". [18+]
1.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Чужая жизнь". [16+]
0.40 Х/ф "Рябины гроздья алые". [16+]
4.10 Х/ф "Белое платье". [16+]
5.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәтсе. [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [6+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Тамъян". [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15, 5.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Концерт Искандара Газизова. [12+]**
**3.00 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**5.45 История одного села. [12+]**

## 27 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Старший сын". К 80-летию со дня рождения Николая Караченцова". [12+]
15.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2024. Этап I. [0+]
16.55 Д/ф "Николай Караченцов. "Я тебя никогда не забуду..." [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.30 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юморина-2024". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.40 Х/ф "Букет". [12+]
3.24 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15 Орнамент. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.45 Зерно. [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Д/ф "Сердце". [12+]**
**17.00 Вестник Газпромтрансгаз Уфа. [12+]**
**17.15 Мегасело. [12+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Творческий вечер композитора Лейлы Исмагиловой. [12+]**
**0.45 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**3.15 Колесо времени. [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (18) дүшәмбе | 6:15 | 7:59 | 13:30 | 16:10 | 18:01 | 19:45 |
| 22 (19) шишәмбе | 6:17 | 8:01 | 13:30 | 16:08 | 17:58 | 19:43 |
| 23 (20) шаршамбы | 6:19 | 8:03 | 13:30 | 16:06 | 17:56 | 19:41 |
| 24 (21) кесе йома | 6:21 | 8:05 | 13:30 | 16:04 | 17:54 | 19:38 |
| 25 (22) йома | 6:23 | 8:07 | 13:30 | 16:02 | 17:51 | 19:36 |
| 26 (23) шәмбе | 6:25 | 8:09 | 13:30 | 16:00 | 17:49 | 19:34 |
| 27 (24) йәкшәмбе | 6:27 | 8:11 | 13:30 | 15:58 | 17:47 | 19:32 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Яҙмышҡа мыжыуҙан туҡта, өйөңдән сыҡ һәм тормошто ике ҡуллап ҡосаҡла.*

*(Хантер Адамс).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ТЫУЫУЫНА - 105 ЙЫЛ



**20 октябрҙә Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостафа Сафа улы Кәримовтың тыуыуына 105 йыл тула.**

Уның турала белмәгән кеше юҡтыр арабыҙҙа: һәр быуын балалары шиғырҙарын бәләкәйҙән яттан һөйләп үҫә, сәсмә әҫәрҙәрен яратып уҡый, унын әҫәрҙәре буйынса спектаклдәр ҡуйыла, фильмдар төшөрөлә һәм һис береһен битараф ҡалдырмай.

Мостай Кәрим 1969 йылда ижад иткән "Уңдым" шиғырында "Эйе, уңдым. Күп нәмәнән уңдым, Минән уңды микән бүтәндәр?" - тигән һорау ҡуя. Әҙиптең замандаштары ғына түгел, киләһе быуындар ҙа, моғайын, уға ыңғай яуап ҡайтарыр: "Эйе, уңдыҡ!"

Башватҡыста Мостай Кәримдең билдәле әҫәрҙәренең атамаларын хәтергә төшөрөргә тәҡдим итәбеҙ.

## Ҡоштар осорам

*Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам,*
*Бар эшемдең сыҡтым осона.*
*Шуға күрә бөгөн таңдан алып*
*Күкрәгемдән ҡоштар осорам.*

*Аҡлыҡ, хаҡлыҡ өсөн көрәшселәр!*
*Тәү булөгем һеҙгә, ҡарағыҙ:*
*Ҡанаттарын ғорур ҡаға-ҡаға*
*Күтәрелде ҡуккә ҡарағош.*

*Юлдағылар! Һеҙгә ебәрәмен*
*Ел-дауылдар үтер торнаны.*
*Сирлеләрем, кәкүк осорам һеҙгә -*
*Оҙаҡ-оҙаҡ саҡыра торғанын.*

*Сығып осто ярһыу бер һандуғас,*
*Ғашиҡтарым, һеҙҙең өлөшкә.*
*Көткәндәргә - аҡ күгәрсен килер,*
*Яңы өмөт өҫтәп өмөткә.*

*Хыялыйҙар, сая һәм йыуаштар!*
*Һәммәгеҙгә тейер ҡошом бар.*
*Ғәмһеҙҙәргә генә һис нәмә юҡ -*
*Әйҙә улар ҡошһоҙ торһондар.*

*Ығы-зығы, ваҡ мәшәҡәт тамам,*
*Бар эшемдең сыҡтым осона.*
*Шуға күрә һәр көн таңдан алып*
*Күкрәгемдән ҡоштар осорам.*

*1970*




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Болид. Бикбаев. Лимон. Чабан. Этлек. Одиссей. Иҙрисов. Әлхәм. Игелек. Вут. Һум. Шәкүр. Оҫта. Рейн. Шәхес. Вахта. Ек. Шиғриәт. Аҡһым. Асабина. Депутат.

**Вертикаль буйынса:** Ислахов. Чураева. Сәстараш. Бала. Исланд. Новик. Бәкәл. Һунар. Ил. Бау. Мәсәлимов. Твен. Диван. Ант. Эйә. Шашка. Ләлә. Әсеү. Күм. Рәсем.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 октябрь "Йырланмаған йырым һин..."** (В. Исхаҡов), музыкаль мелодрама. 16+
**27 октябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**27 октябрь Премьера! "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим), бәхетле бала саҡ. 12.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 октябрь "Озеро заколдованного коня"** (Ғ. Шафиков). 12+
**25 октябрь "Каменный гость"** (А. Пушкин). 12+
**26 октябрь "Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+
**"Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 14.00 0+
**27 октябрь "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 октябрь "Кабатланмаҫ..."** Ф. Иҡсановтың хәтер кисәһе. 6+
**24 октябрь "Биг-бэнд йондоҙҙары-2"** концерт. 6+
**25 октябрь "Күңелем түрендәге моңдарым"** Ф. Яҡшығоловтың юбилей кисәһе. 6+
**26 октябрь "Музыкаль интерактив"** (4-7 йәшлектәр өсөн). 11.00 0+
**"XX быуат музыкаһы"** Башҡорт филармонияһының Камерный оркестры. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**26 октябрь "Три поросенка"** (З. Сөләймәнов инсц.), музыкаль әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**24 октябрь Премьера! "Многая лета Русской земле"** Рус халыҡ инструменттары оркестры концерты. 6+
**27 октябрь "Как Петух мир спасал"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 12.00 0+
**"Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

### БР Милли музейы

**26 октябрь** Ғаиләләр өсөн экскурсия. 15.00 0+

ЯҢЫ КИТАП

# КҮҢЕЛ БҮЛӘКТӘРЕ...

**Башҡортостандың З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә яңы китаптар донъя күргән.**

Шулар араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 105 йыл тулыу айҡанлы сыҡҡан "Ғаләмдең дүрт тарафы" тигән яңы китап та бар. Катапҡа шағирҙың Кешегә, уның бөйөклөгөнә, күңел матурлығына, рух ныҡлығына арналған шиғырҙары тупланған.

Шулай уҡ күптәр әҫәрҙәрен яратып уҡыған яҙыусы, журналист Хәйҙәр Тапаҡовтың "Йәшлегемә ҡайтыу" тип аталған сираттағы йыйынтығы донъя күргән. Был китапҡа яҙыусының һуңғы йылдарҙа ижад ителгән повестары һәм хикәйәләре ингән. "Был минең уҡыусыларыма сираттағы әҙәби бүләк, күңел бүләге. Шуның өсөн минең генә китапты түгел, ғөмүмән, башҡорт китаптарын алдырығыҙ, уҡығыҙ, таратығыҙ", - ти Хәйҙәр Ниғәмәт улы.

✓ *Унының нигеҙе тарихи ерлек - батша Указы менән килгән илсе башта бер ерҙә лә башҡорттарҙы тап итә алмай, сөнки был мәлдә бөтә ерҙе саранча баҫып алған һәм башҡорттар ошо афәт менән көрәшергә сыҡҡан була.*



АФАРИН!

# ЙӘНҺҮРӘТ НИГЕҘЕНДӘ...

## тик тарихи ерлек ята

**Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһының быйылғы лауреаттары араһында "Төньяҡ амурҙары" тулы метражлы анимация фильмын төшөргән "Муха" йәмғиәте директоры Артур АБДРАХМАНОВ та бар. "Башҡортостан" киностудияһы менән берлектә ижад ителгән "Төньяҡ амурҙары" ҙур ваҡиға тип ҡабул ителде. "Муха" йәмғиәтенә килгәндә инде, ул күптән сағыу кинопремьералар өҫтөндә эшләүе менән билдәле. "Чебурашка" и "Нюрнберг" фильмдарында, шулай уҡ сериалдарҙа уларҙың хеҙмәт өлөшө тос. Беҙ Артур Вәли улына бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**"Төньяҡ амурҙары" тулы метражлы анимация фильмын төшөрөү идеяһы нисек һәм ҡасан тыуҙы?**

- Беҙҙең "Муха" студияһы күптән эшләп килһә лә, уға Хөкүмәт тарафынан иғтибар булды, тип әйтә алмайым. Ә бына республикаға етәксе булып Радий Хәбиров килгәс, ул беҙҙең студияны килеп күреү һәм унын эшмәкәрлеге менән танышыу теләген белдерҙе. Ысынлап та, күп тә үтмәне, Радий Фәрит улы студияға килеп, ижадыбыҙ менән ҡыҙыҡһынды, Мәскәүгә һәм башҡа тарафтарға йәнһүрәттәр эшләүебеҙ тураһында мәғлүмәтте ишетте. Шул саҡта: "Егеттәр, Төньяҡ амурҙары тураһында бөтәһенә лә ишеттерге килә", - тип, үҙенең идеяһын еткерҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, мин үҙем дә Төньяҡ амурҙары тарихын белмәй инем, бары "Любизар" йырын, шулай уҡ әҙәк-йыртыҡ ҡайһы бер ваҡиғаларҙы ғына ишеткәнем бар ине. Шуға ла ул мәлдә ысын тарихты белә инем, тип әйтә алмайым. Беҙҙең коллективты тарихсы Рәмил Рәхимов менән таныштырҙылар. Француз яуында ҡатнашҡан башҡорттар тураһында ғалим бик күп ҡыҙыҡлы нәмәләр һөйләне. Эш дәүерендә Рәмил Насибулла улы менән менән ныҡ дуҫлашып киттек. Унан алған бөтә мәғлүмәтте йәнһүрәттә күрһәтергә тырыштыҡ.

"Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтен тарих дәреслеге, йәки плакат һымаҡ итеп эшләргә ярамай ине. Тап ғаилә менән бергәләшеп ултырып ҡарай торған, балаларға ла, өлкәндәргә берҙәй ҡыҙыҡ йәнһүрәт булһын тип тырыштыҡ. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең йәнһүрәттә бер ниндәй ҙә уйҙырма юҡ. Унын нигеҙе тарихи ерлек - батша Указы менән килгән илсе, ысынлап та, башта бер ерҙә лә башҡорттарҙы тап итә алмай, сөнки был мәлдә бөтә ерҙе саранча баҫып алған һәм башҡорттар ошо афәт менән көрәшергә сыҡҡан була. Был турала документтар һаҡлана.

Шведтар менән һуғышта ла башҡорттар тотош бер швед карабын ҡулға төшөрә. Шуны нисек йәнһүрәттә күрһәтмәскә, ти! Французлар менән бер алышта башҡорттар Наполеонды саҡ-саҡ әсир итеп алмайҙар бит. Наполеондың лагерын ҡамайҙар, ләкин император ниндәйҙер мөғжизә менән генә ҡасып ҡотола. Был да тарихи факт һәм беҙ уны ла күрһәттек. Францияла башҡорттарҙан ҡурҡыу көслө булған, хатта: "Иғтибар: башҡорттар балаларҙы ашайҙар!" - тигән плакаттары ла булған уларҙын. Рәмил Насибулла улы менән ошондай факттарҙы йыйып-туплап, барыһын да йәнһүрәткә индерҙек. Әлеге ваҡиғаларҙы биш яҡташыбыҙҙың мажаралары аша күрһәтеүгә өлгәштек. Йәнһүрәтте эшләү оҙайлы, мәшәҡәтле булды, беҙ уға өс йыл ваҡытыбыҙҙы сарыф иттек.

**"Төньяҡ амурҙары" коллектив хеҙмәт икәне аңлашыла. Шулай ҙа уны киң донъяға сығарыуҙа кемдәр ҙур тырышлыҡ һалды?**

- Эйе, йәнһүрәтте тыуҙырыуҙа тотош студия бергә егелеп эшләне. Төп ауырлығы, әлбиттә, рәссамдарға эләкте. Йәнһүрәттең нигеҙенә яткан иң тәүге эскиздарҙы, ә уларҙы мин бик мөһим, тип уйлайым, аҡһаҡал рәссамыбыҙ Алексей Николаевич Мотавин төшөрҙө. Хәйер, эскиздар ҙур юлдың башы ғына ине. Ә йәнһүрәт бит өс үлсәмле булырға тейеш. Алексей Николаевичтың эскиздары буйынса бөтән рәссамдар тап өс үлсәмле персонаждар яһарға тотондо. Был осраҡта кемделер айырып әйтеү мөмкин дә түгел, "Төньяҡ амурҙары", ысынлап та, коллектив хеҙмәт емеше.

**Тулы метражлы анимация фильмының юғары премия менән баһаланыуы яңы эштәргә илһамландырғандыр. Алда беҙҙе ниндәй яңылыҡтар көтә?**

- Премия алыу көтөлмәгәнсә булды. Беҙҙең "Муха" студияһы инде нисәмә йылдар Өфөлә эшләй. Унын бер ҡайҙа ла сығып киткәне лә, күсенгәне лә булманы. Һәм бына унын тарихында беренсе тапҡыр Хөкүмәт тарафынан иғтибар булды, ярҙам күрһәтелде. Ошондай мөнәсәбәттең һөҙөмтәһе булып әлеге йәнһүрәт тыуҙы ла инде. Беҙ уға тиклем бөтөн башҡорт хәрефтәренә иғтибар бүлеп, ҡырҡ ике сериянан торған "Әлифба" йәнһүрәтен төшөргәйнек. Шулай итеп, "Муха" студияһы Мәскәүҙәнме, берәй сит илдәнме проекттарын эшләмәй, ә үҙебеҙҙең ерлеккә мөрәжәғәт итә. Әлеге мәлдә Шайморатов генералға арналған - үҙебеҙ өсөн бик мөһим тип һаналған - "Салауат варисҭары" тигән проект өҫтөндә эшләйбеҙ. Шулай уҡ "Әлифба"ны дауам итәбеҙ. Хәҙер инде төстәр, йылдар, һандар, тәүлек мәлдәрен башҡорт телендә аңғыратасаҡбыҙ. Улар барыһы ла балаларға туған телде өйрәнеүҙә ҙур ярҙам буласаҡ. Былардан тыш, "Пушкин Михайловкала" тигән 52 сериялы йәнһүрәт төшөргәйнек, хәҙер "Пушкин Кавказда" тигән кисәген төшөрәбеҙ. Кинолар өсөн компьютер графикаһында ла эшләйбеҙ. Ниндәй генә эшкә тотонһаҡ та, беҙҙең өсөн "Салауат тоҡомдары" һәм "Әлифба" иң мөһим проект булып ҡала. Беҙҙең "Әлифба" балаларҙы ғына түгел, бик күптәрҙе башҡортсаға өйрәтер, тип өмөтләнәм. Беҙ үҙебеҙ ҙә "Әлифба" йәнһүрәте өҫтөндә эшләй-эшләй телебеҙҙе камиллаштырабыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АБАЙЛАМАЙ ҺӨЙЛӘГӘН...

## ауырымай үлгән

Ишәк ауырығанын, ир ҡартайғанын белмәҫ

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхетле осраҡлыҡтар менән йәшәгән кешене бер ваҡытта ла бәхетле тип иҫәпләмә.

**(Луций Сенека).**

Яҙмышҡа мыжыуҙан туҡта, өйөндән сыҡ һәм тормошто ике ҡуллап ҡосаҡла.

**(Хантер Адамс).**

Был донъяны ҡалдырыр алдынан үҙенең варисҭарына байлыҡ ҡалдырыусы кеше мәрхәмәтле тип иҫәпләнә алмай - уның бит башҡа сараһы юҡ.

**(Уильям Гладстон).**

Был донъяла үҙҙәренең ниндәй донъяла йәшәгәнен аңламаған кешеләр бик күп.

**(Боб Хоуп).**

Беҙҙең күбебеҙ, ҡояш һәр иртә һайын уның йырын тыңлау өсөн генә ҡалҡа, тип уйлаусы әтәскә оҡшаш.

**(К. Джером).**

Әгәр ҙә һин яуызлыҡҡа юлдаш йә уның өнһөҙ күҙәтеүсеһе булғанһың икән, ундай тормош өсөн үкенмәһәң дә була.

**(Луи Сент-Жюст).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер шаман өс һеңлеһе менән юл буйлап китеп барһа, ҡаршыларына шул замандың мәшһүр һуғышсыһы осрай.**

**- Һинең һеңлеләреңдең береһенә өйләнергә теләр инем, - ти ул шаманға хөрмәт менән баш эйеп.**

**- Юҡ, - ти шаман, - һеңлеләремдең береһе кейәүгә сыҡһа, ҡалған икеүһе мәхрүм буласаҡ. Шуға ла мин бер иргә өс ҡатын алырға рөхсәт ителгән ҡәбиләне эҙләйем...**

**Шаман бөтә Австралия ҡитғаһын урап сыға, әммә ирҙәргә өс ҡатын алырға рөхсәт ителгән ҡәбиләне таба алмай. Шулай ғүмерҙәре заяға үтә уның һеңлеләренең.**

**Бер саҡ шаман ҡартайып, атлап йөрөй алмаҫлыҡ хәлгә килгән һеңлеләренең:**

**- Ә бит беҙҙең беребеҙ булһа ла бәхеткә өлгәшә ала ине, - тип үкенес белдергәнен ишетеп ҡала һәм:**

**- Эйе, мин ул саҡта хаҡлы булмағанмын. Ә хәҙер һуң инде... - тип, һеңлеләренән ғәфү үтенә.**

**Шунан шаман һеңлеләрен таш һынға әйләндерә. Таш һындар янынан үткән кешеләр, бер кешенең бәхете башҡалар бәхетһеҙ була икәнде аңлатмай әле, тигән хәҡиҡәтте аңлаһын өсөн эшләй ул быны..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24041

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1813